✓ *"Һинән бәхетһеҙерәк кешеләр ҙә бар был донъяла". Әлбиттә, был һүҙҙәр һине һыйындырыр ҡыйыҡ түгел, әммә улар ниндәйҙер дауылдан йәшеренергә етеп тора.*

*(Г. Лихтенберг).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

15 - 21 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№24 (546)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Байрам алдынан...**

өлгәшелгәндәр барланды





4

**Таяҡ ике башлы...**

миҙал ике яҡлы





7

**Ҡомартҡыны мөхәррирләргә ярамай...**

йәки "Урал батыр" эпосы яҡлауға мохтаж





8-9

**"Алтын тирмә" генә тигәндәре...**

эсе тулы аҡыл, уй икән...





10

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Донъя менән идара иттерер мәғлүмәтте ниндәй сығанаҡтарҙан алаһығыҙ?

***Баныу ҠАҺАРМАНОВА, "Йәшлек" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты:*** Бер яҡлы ғына фекер төйнәү булмаһын өсөн бөтә сығанаҡтарҙы ла файҙаланырға тырышам, шул уҡ ваҡытта алынған мәғлүмәт һәм факттарҙы ентекләп өйрәнәм, анализлайым, шунһыҙ беҙҙең эштә мөмкин дә түгел. Үҙ һөнәренең абруйы өсөн яуаплылыҡ тойған журналистан оперативлыҡ, йыйнаҡлыҡ ҡына түгел, бәлки, күп йәһәттән һәр өлкәлә - сәйәсәт, иҡтисад, социаль һәм башҡа мәсьәләләр буйынса хәбәрҙар булыу, объектив фекерләй, анализлай белеү кеүек сифаттар айырыуса ныҡ талап ителә. Шуға күрә аналитикаға ҡоролған етди гәзит-журналдарҙы даими күҙәтеп барам, радио, телевидение тапшырыуҙарын да күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа тырышам.

Бөгөн мәғлүмәт даирәһен интернетһыҙ күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Унда, әлбиттә, бөтәһе лә бар һәм хатта, әйтер инем, артығы менән. Бөтөн донъя ауында буталанмайынса, иң кәрәкле һәм объектив мәғлүмәтте һайлап ала белеү ҙә мөһим. Был инде һәр кешенең, әле беҙ һүҙ алып барған осраҡта - журналистың — аҡыл һәм аң кимәленә, фекерләү ҡеүәһенә бәйле, тип уйлайым, сөнки һәр бер ялтыраған аҫыл таш булмағандай, интернеттағы һәр мәғлүмәттең дә хәҡиҡәт түгеллеген беләбеҙ. Шуға ла мәғлүмәт сығанаҡтарының башҡа төрҙәренә мөрәжәғәт итеү фарыҙ: йәмәғәтселек фекере, әйләнә-тирәндәге кешеләр, дуҫтарың, хеҙмәттәштәрең, яҙыласаҡ мәҡәләң геройҙары... Әмәлгә ҡалғандай, мин әле "Вконтакте" интернет сайтында Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тарафынан тәүге уҡыуҙа ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы яңы законға, атап әйткәндә, уның рус теле менән бер рәттән дәүләт теле булған башҡорт телен уҡытыуға ҡағылышлы пункты буйынса барған бәхәстәрҙе уҡып ултыра инем. Беҙҙә һаман да ошо мәсьәләне болғарға, ҡуйыртырға теләүсе андары сикләнгән кешеләрҙең булыуы ҡыҙғаныс. Ә бит телдәрҙе өйрәнеү - шулай уҡ иҫ киткес бай мәғлүмәт сығанағы ла баһа! Телдәрҙе күберәк белгән һайын, кешенең аң-белеме, интеллект ҡеүәһе лә арта ғына бара, донъяға ҡарашы киңәйә, ләкин тар маңлайлы, тар күңелле бәғзе берәүҙәр был хәҡиҡәтте аңлауҙан бик алыҫ тора...

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# АҘАШМАҪ ӨСӨН,

## үҙ юлыңды табыу өсөн...



**Шундай бөйөк техник прогрестарға сәбәпсе булған әҙәм балаһы йыш ҡына ябай һорауҙарға яуап эҙләмәй, аҙаҡҡа ҡалдыра, онота. Үҙенең кем булыуы, ҡайҙа һәм ни өсөн йүнәлеүе хаҡында ла уйланып ҡарамай ул. Сикһеҙ мәғлүмәт диңгеҙендә, меңәрләгән фекер айырмалығы булған мөхиттә аҙаша шулай.**

Аҙаштырыусылар ҙа, ысын ҡиммәттәрҙең бәҫен төшөрөүселәр ҙә етерлек хәҙер. Шуға ла ысын ҡиммәттәр урынын интернет, телевидение, гәзит-журналдар аша килгән яһалма ҡиммәттәр алыштыра. Кеше ысын күңелдән ниндәйҙер "йондоҙҙоң" сираттағы туйы хаҡында гәп һата, ирекһеҙҙән үҙенә бер ниндәй ҡыҫылышы булмаған кешеләрҙең тормошо менән йәшәй башлай. Ә янындағы кешеләр онотола, үҙенең тамағы, матди ихтыяждары хаҡында уйланһа ла, булмышы хаҡында уйҙарға бер мейе ебен дә ҡыбырлатмай. Күп киң мәғлүмәт саралары ла йә аңлы рәүештә, йә үҙҙәре лә белмәҫтән, ошо йүнәлештә эшләй. Уларҙың тауары - енәйәт, аҙғынлыҡ, башҡа төрлө бысраҡ. Был тауар кешенең фекер ҡеүәһен тарайтып, уны боҙоп ҡына ҡалмай, өмөтһөҙлөк тигән ҡурҡыныс сирҙең шашып китеүенә лә сәбәпсе була.

Һәр саҡ бысраҡ нәмәләр хаҡында һөйләп, яҙып, күрһәтеп, донъяға йәм өҫтәп була микән һуң? Бик икеле. Кеше үҙ янындағы мөхитте үҙ уйҙары менән булдыра, тип әйтәләр бит. Һәр саҡ яман әйберҙәр хаҡында һөйләһәң, улар һине ғүмер баҡый оҙатып йөрөйәсәк. Аҡыл эйәләре, психологтар матур уйҙар уйлап, матур һүҙҙәр һөйләп йөрөгөҙ, тип тылҡый һәр саҡ. Бары үҙеңдән матурлыҡ бөрккәндә генә, уның нурҙары һине уратып алған кешеләргә, йәмғиәткә тарала шул.

"Киске Өфө" гәзите был йәһәттән ғәйәт ҙур эш башҡара. Ул тап ошо нурҙы таратыусы баҫма, мәғлүмәт сығанағы. Бар яҡтан ябырылып килгән ҡараңғылыҡты йырып сығырға, уға ҡаршы торорға көс бирә, үҙ-үҙеңдә ышаныс уята. Дөйөм өмөтһөҙлөккә ҡаршы ихлас көрәшә, үҙ тирәһенә көрәшеүселәрҙе туплай.

Мин "Киске Өфө"нө студент саҡтан уҡып барам. Университетта уҡыған саҡта гәзиттең килеүен көтөп ала, китапханаға төшә һалып, уны таратып алып бөтә торғайныҡ. Гәзитте шулай даими уҡыусы студенттар бар ине. Ләкин "Киске Өфө"нө аңлай, ҡабул итә алмағандар ҙа булды. Күҙәтеүҙәрем буйынса, ҡиммәттәр тураһындағы ҡарашы беҙҙекенән ҡырҡа айырылыусылар, төнгө клубтарҙы үҙ итеүселәр һәм шундай урындарҙа йыйылған компаниялар менән дуҫлыҡ ҡороусыларға гәзит хуш килмәне. Сөнки "Киске Өфө"нөң йөкмәткеһе уларҙың ҡараштарының хаталы булыуын фашланы. Ләкин төрлө йәмәғәт ойошмалары активистарына, айыҡ тормош алып барыусыларға гәзит ныҡ оҡшаны. Ул саҡта айыҡ саралар үткәреү йолаһы, рухи ҡиммәттәргә иғтибар арта башлаған мәл ине. Һайлаған юлыбыҙҙың хаҡлығына инаныуҙа, унда нығыныуҙа һәм башҡаларҙы ла шул юлға әйҙәүҙә "Киске Өфө"нөң дә үҙ роле бар. Уны бөгөн дә тормош юлында аҙашмаҫ, үҙ юлыңды табыр өсөн уҡырға кәрәк.

**Рәшит ТАЙБУГИН.**

✓ *Аллаға тапшырып, эш башларға кәрәк. Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа осрап ҡына тора, хаталар ҙа йыш була, ләкин нәҡ шуларҙы йырып сыҡҡан саҡта, мәсьәләләрҙе хәл иткән ваҡытта кеше йышыла, эштең тәртибенә өйрәнә.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# КҮҘ - ҠУРҠАҠ...
## ҡул - батыр



**Йүнсел йүнен таба, ғаиләһенә лайыҡлы тормош булдыра, балаларын бер нәмәгә зарынтизар иттермәй. Бындай кешеләр һәр районда һәм ауылда бар. Улар үҙҙәренең эшһөйәрлеге, тырышлығы менән башҡаларға өлгө булып, матур итеп донъя көтә.**

Һүҙем ошондай ир-уҙамандарҙың береһе - Йылайыр районы Яманһаҙ ауылынан Риф Шаһимәрҙән улы Солтангилдин хаҡында. Ул 2005 йылдан алып ҡаҙ үрсетеү менән шөғөлләнә һәм көньяҡ райондарҙы ҡаҙ ите менән генә түгел, ә ҡаҙ бәпкәләре менән дә тәьмин итә. Йыл да көҙ 1мең баш ҡаҙ һуйып һата, уларҙан тыш, икенсе йылға йомортҡа һалдырыу өсөн 400 баш инә ҡаҙ ҡалдыра. Йомортҡаларҙы үҙенең шәхси инкубаторында баҫтырып сығара һәм яҡын-тирәләге райондарға һәм ауылдарға һата. Йыл һайын йәмғеһе 3-4 мең тирәһе себеш һата. Ҡаҙ йөнөнә лә эш "табылған": улары Туймазы районындағы "Серафимовская пушинка", шулай уҡ ООО "Башкиргусь" ойошмаларына ебәрелә.

Ҡыҙыу эш ваҡытында эшселәр йәлеп итә Риф Шаһимәрҙән улы. Эш хаҡын, теләктәре буйынса, йә аҡсалата, йә себештәр, йә ҡаҙ менән тарата. "Күҙ - ҡурҡаҡ, ҡул - батыр. Эштән, кредит алыуҙан, төрлө документтар тултырыуҙан ҡурҡмайынса, Аллаға тапшырып, эш башларға кәрәк. Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа осрап ҡына тора, хаталар ҙа йыш була, ләкин нәҡ шуларҙы йырып сыҡҡан саҡта, мәсьәләләрҙе хәл иткән ваҡытта кеше йышыла, эштең тәртибенә өйрәнә. Эсмәй, тормошҡа зарланмайынса йәшәргә, тырышырға кәрәк. Тырышҡан кеше һәр саҡ юлын таба ул", - тип һүҙен йомғаҡланы Риф Солтангилдин.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

# ҺАТЫП АЛАМ ДА...
## үҙем дә һатам

**Мин Өфө ҡалаһында йәшәйем. Оҙаҡ йылдар магазинда һатыусы булып эшләп, күптән түгел хаҡлы ялға сыҡтым. Ғүмер буйы эшләп өйрәнгәнгә, өйҙә оҙаҡ ултырып сыҙаманым һәм күңелемә ләятҡан, кеҫәмде лә бер аҙ ҡалынайтҡан шөғөл таптым.**

Үҙем бик аралашыусан кешемен. Тирә-яҡтағылар менән тиҙ үк уртаҡ тел табып, һәйбәт мөнәсәбәт ҡорам. Шулай бер баҙарға барғанда емеш-еләк, төрлө әйбер, йәшел тәмләткестәр һатыусылар менән һөйләшеп киттем. Улар араһында минең кеүек үк хаҡлы ялда булыусылар ҙа күп ине. Нәҡ ошо апайҙар миңә бер аҙ аҡса эшләү юлын өйрәтте лә инде. Хәҙер күп кенә баҙарҙар янында хаҡлы ялда булыусыларға һатыу итеү өсөн махсус урындар бирелгән. Бик уңайлы итеп эшләнгән бындай урындарҙа һатыу иткән өсөн пенсионерҙар бер ниндәй ҙә хаҡ түләмәй, уларға ниндәйҙер рөхсәт ҡағыҙы, ҡуртымға алыу өсөн килешеүҙәр төҙөргә кәрәкмәй. Тикшереү үткәреүселәргә пенсия танытмаһын күрһәтеү ҙә етә. Бындай шәп мөмкинлекте мин ҡулдан ысҡындырманым һәм "эшҡыуар" пенсионерҙар рәтен тулыландырҙым. Ҡала фатирында йәшәгәс, ҡайһы бер апай-ағайҙар кеүек, мин үҙ баҡсамда үҫкән йәшел һуған, укроп, петрушкаларҙы тәҡдим итә алмайым. Шуға күрә Затон биҫтәһендәге күмәртәләп һатыу баҙарынан көсөм еткән тиклем йәшел үләндәр һатып алам да, бәләкәй бәйләмдәргә бүлеп, һатыуға сығарам. Йәшел тәмләткестәрҙе бик теләп һатып алалар, шуға күрә килемем дә арыу ғына була. Мәҫәлән, сағыштырыу өсөн, Затон биҫтәһенән алған 150 һумлыҡ тауарҙан 300-400 тирәһе аҡса эшләйем. Ләкин был эшмәкәрлегем миңә, иң мөһиме, кеше араһында булырға, аралашырға мөмкинлек бирә.

**Луиза АҪЫЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Донъя менән идара иттерер мәғлүмәтте ниндәй сығанаҡтарҙан алаһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Урал МОСТАФИН, яҙыусы, публицист:*** Йәмғиәтебеҙ бөгөн өс төрлө ҡатламға бүленгән: байҙар, урта хәллеләр һәм ярлылар. Берәүҙәр аҡсаһын ҡайҙа ҡуйырға белмәй ҡоторғанда, икенселәр хәйерселектә яфа сигә. Ошондай шарттарҙа киң мәғлүмәт сараларына үҙ урынын, үҙ уҡыусыһын табыуы, дөрөҫ тон тотоуы ҡыйынғараҡҡа тура килә лер, тип уйлайым. Шунлыҡтан, уларҙа ла бүленеш күҙәтелә: матбуғат сараларының ҡайһылары, аҡсаға һатылып, йәшермәйенсә юғары ҡатлам мәнфәғәтенә хеҙмәт итә. Икенселәре иһә, гел генә кире мәғлүмәттәр артынан ҡыуып, енәйәт, фажиғә, әхлаҡһыҙлыҡ кеүек тиҫкәре күренештәрҙе генә яҡтырта һәм халыҡ иғтибарын төп проблемаларҙан ситкә йүнәлтергә тырыша. Ә халыҡ кемгә барып, ҡайҙан хәҡиҡәт эҙләргә белмәй ҡаңғыра, объектив мәғлүмәт эҙләй, ауаздаш фекер ишетергә теләй. Шуға күрә лә икһеҙ-сикһеҙ мәғлүмәт дарьяһында аҙашып ҡалырға теләмәһәң, халыҡ араһында ихтирам һәм абруй ҡаҙанған матбуғат баҫмаларына өҫтөнлөк бирәһең инде. Мин үҙем, мәҫәлән, "Киске Өфө", "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәрен, "Ватандаш", "Ағиҙел" журналдарын уҡыйым, Рәсәй Федерация Советының баҫма органы булған "РФ бөгөн"тигән журналды даими күҙәтеп барам. Ошо журналдан бөгөнгө Рәсәйҙәге хәлдәр тураһында бик күп мәғлүмәт алам, анализлайым, һығымталар яһайым. Ә күршеләрҙәге хәлде белеү өсөн "Ҡазан утлары" журналын уҡыйым. Интернет менән бик мауыҡмайым, ә бына китапханала йыш булам - бына шулар минең өсөн төп мәғлүмәт сығанаҡтары.

***Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты:*** Мәғлүмәтте мин матбуғат баҫмаларынан алам: бөгөнгө мәғлүмәти сараларҙың тышҡы цензоры булмағас, үҙҙәренең эске цензураһы булған баҫмаларға өҫтөнлөк бирәм. Улар иҫәбенә башҡорт телендә сыҡҡан үҙебеҙҙең гәзиттәрҙе, "АиФ"кеүек үҙәк баҫмаларҙы индерәм. Ығы-зығы, шау-шоу, юҡ-бар яҙып, уйһыҙ уҡыусыны йәлеп итеүгә, күберәк табыш алыуға ғына йүнәлеш тотҡан "һары баҫмалар"ҙы ҡарағаным юҡ. Мине нигеҙҙә үҙебеҙҙең телгә, халҡыбыҙ тарихына, мәҙәниәтенә, шәхестәренә ҡағылышлы мәғлүмәт ҡыҙыҡһындыра. Донъя хәлдәрен күҙәтеп барыуға ла бер аҙ иғтибар итәм. Бөгөн бер үк күренешкә әллә нисә төрлө баһа биреү - ғәҙәти хәл. Шуға ла теге йә был ваҡиға тураһында үҙ фекереңде булдырыу өсөн төрлө матбуғат баҫмаларына ла, телетапшырыуҙарға ла мөрәжәғәт итергә тура килә. Шундай баҫмаларҙың береһе минең өсөн - "Киске Өфө" гәзите. Уны мин сыға башлағаны бирле бер һанын да ҡалдырмай уҡып барам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙгә яҙылып, һеҙ баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләйһегеҙ, туған телгә, мәҙәниәткә тоғролоҡто, ихтирамды, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтәһегеҙ икәнен иҫегеҙҙән сығармаһағыҙсы.**

● Шулай итеп, 2013 йылдың икенсе яртыһына **50665** индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **378 һум 36 тингә** яҙылырға була. Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **Тағы.** Гәзитебеҙгә бар йәмәғәт менән яҙылған Баймаҡ районы Ярат ауылы халҡы өлгөһөнә эйәргән ауылдарға, коллективтарға **"Кескәй китапхана"** бүләк итәбеҙ. Был китапханала **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡортса **"Ҡөрьән-Кәрим"**, С. Руденконың **"Башҡорттар"**, **"Башҡорт костюмы"** баҫмалары, Ноғман Мусиндың **"Алдар батыр"** һәм башҡа китаптар бар.




● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө менән ҡотлау** - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Өфөлә йәшәүселәр өсөн** гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлы бар: Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә БР Хөкүмәте Президиумы ултырышы үтте. Сарала етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү һәм махсус торлаҡ фонды формалаштырыу мәсьәләләре тикшерелде. Үткән йылдан башлап етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса вәкәләттәр урындағы үҙидара органдарына йөкмәтелде. Төп проблема - был маҡсаттарға бүленгән аҡсаны тулы кимәлдә файҙаланмау. Былтыр уҡ торлаҡ менән тәьмин ителергә тейеш 98 бала әле булһа торлаҡ алмаған. Етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн махсус торлаҡ фонды булдырыу буйынса тәҡдимдәр проектын Рөстәм Хәмитов ҡаты тәнҡиткә алды һәм документты аҙағынаса эшләп бөтөргә ҡушты.

✓Ағымдағы йылдың октябрендә ЮНЕСКО-ның Париждағы штаб-фатирында Башҡортостан Республикаһының халыҡ-ара презентацияһы үтәсәк. Республика өсөн мөһим булған ваҡиғаға әҙерлек мәсьәләләре БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһының Парижға визиты барышында тикшерелде. Вице-премьер Рәсәйҙең Франциялағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Александр Орлов, Рәсәйҙең Париждағы Фән һәм мәҙәниәт үҙәге директоры Игорь Шпынов, ЮНЕСКО-ның штаб-фатиры Секретариаты вәкилдәре менән осрашты.

✓Танылған модельер Вячеслав Зайцев яңы мәктәп формаһын булдырыуҙа ярҙам итеү маҡсатында Өфөгә килде. Визит сиктәрендә ул Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашты. Өфө трикотаж фабрикаһында, унын директоры Зөһрә Исмәғилева һүҙҙәренсә, мәктәп формаһы биш йыл элек әҙерләнә башлаған. Танылған кутюрье коллекцияны эшләп бөтөүҙә ҡатнашырға ризалыҡ биргән. Президент менән осрашыу барышында Башҡортостанда әҙерләнгән коллекция буйынса консультациялар ойоштороу мөмкинлектәре тикшерелде.

✓"Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы БР Законы яҙғы сессия аҙағынаса ҡабул ителәсәк. Был хаҡта БР Дәүләт Йыйылышының комитет рәйесе Рауил Бикбаев хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ғәмәлдәге федераль ҡануниәткә ярашлы, төбәктәр кимәлендә белем биреү системаһы эшмәкәрлегенең төп принциптарын билдәләгән документты ҡабул итеү сроктары сикләнгән. Федераль закон 1 сентябрҙән үҙ көсөнә инәсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# КЕМЛЕГЕҢДЕ БЕЛГЕҢ КИЛҺӘ...

## күршеңдән һораш

**"Өйөңдәге хәлеңде күршеңдән барып һора" тип тә әйтәләр. Әгәр ҙә ошо әйтемдәрҙәге фекерҙе нигеҙ итеп алғанда, кешенең үҙ-үҙенә биргән баһаһынан да күршеһенеке дөрөҫөрәк һәм ғәҙелерәк булып сыға инде. Тик күрше булған кеше, күршелек мөнәсәбәтен һаҡлап, һинең туралағы хаҡ баһаны әйтерме? Ни өсөн тигәндә, дошман булған күршенән дә ҡурҡынысыраҡ дошман булыуы мөмкинме икән? Шулай ҙа мәҡәл-әйтем барлыҡҡа килгән һәм унда ошо фекер әйтелгән икән, уның быға нигеҙҙәре лә булған һәм бар. Мәҫәлән, ни өсөн фәҡәт күршенең бирелгән баһаһы иң дөрөҫө? Шул хаҡта фекер йөрөтәйек.**



Ике күрше йәшәгән. Уларҙың береһе матур, иркен, икенсеһе иҫке бәләкәй йортта көн күргән. Матур йортта йәшәүсенең мал-тыуары ишле, бала-сағаһы күп булған, баҡсаһында йәшелсә-емештәре ишелеп уңған. Бындай айырмалыҡ иҫке йортта йәшәгән күршенең күңелендә көнсөллөк тойғолары тыуҙырған. Ни өсөн тигәндә, ул, нисек кенә тырышып эшләмәһен, тәүлек әйләнәһенә баш күтәрмәй тир түкмәһен, бил бөкмәһен, уның донъяһы ҡотаймаған, һаман да шул алама йортонда йәшәүен дауам иткән. Көнсөл күрше шулай фекер йөрөткән: улар бер төрлө шарттарҙа йәшәй, бер үк йылғаның һыуын эсә, бер иш хеҙмәтте башҡара, ә ниңә бәхет, уңыш һандуғасы уның йортоноң ҡыйығына ҡунып һайрамай һуң? Ул күршеһенән күрмәксе, үҙ йортонда һәм ихатаһында барлыҡ эштәрҙе хатта унан да алдараҡ, күпкә арттырыбыраҡ итеп эшләгән, барыбер мандымаған. Көнсөл күрше һәр ваҡыт ҡотло күршеһенән нисек булһа ла үс алырға иҫәп тотоп, уңайлы мәлде көтөп теш ҡайрап йәшәгән.

Бер йылды сираттағы көҙ үтеп, ҡыш килгәндә көнсөл күршене тағы ла нығыраҡ һиҫкәндергән ваҡиға булған. Һәр ваҡыт бар эште күршеһенән алдараҡ, сифатлыраҡ башҡарырға күнеккән көнсөл күрше төндә яуған тәүге ҡарҙы ҡара таңдан тороп көрәп, ихатаһы алдын ялт итеп ялтыратып уҡ ҡуйған. Ҡояш ҡалҡыуға күршеһе ихатаһына күҙ һалһа, ул әллә ҡасан уҡ көрәлеп, көҙгөләй ята, имеш. Иртәгәһенә көнсөл күрше тәүге көнгә ҡарағанда бер сәғәткә иртәрәк тороп, тағы ла мулыраҡ итеп яуған ҡарҙы көрәп, ҡояш ҡалҡыуға күршеһенекенә ҡараһа, уныҡы кисәгенән дә иртәрәк һәм шәберәк көрәлеп, тағы ла көҙгөләй ялтырай, имеш. Ғәрсел күрше өсөнсө төндә ҡатынын һәм балаларын да ихатаһына ҡар көрәргә алып сыҡҡан. Был төндә ҡар хәтһеҙ күп яуып, урамдарҙа көрттәр хасил иткән. Күмәкләп ихата эсен ҡарҙан таҙартыу ғына түгел, ҡара ерен әйләндереп уҡ һалып ҡуйған улар. Ҡараһалар, күршеһенең ихатаһы әллә ҡасан уҡ ҡарҙан көрәлеп, ялтырап ята, имеш.

Ғәрсел күрше шартлар хәлгә етешеп, күршеһенең ихатаһына йүгереп барып инеп, уны йортонан саҡырып сығырған.

-Минән көләр өсөн юрамал шулай итәһеңме һин? - тип өҫтөнә тауҙай ябырылған ғәрсел күрше.

-Мин һине аңламайым, күршем, нишләп һинән көләйем, ти, аңлат, - тигән уға күршеһе бер ни булмағандай тыныс ҡына.

-Белмәмешкә һалышма, бына өсөнсө көн инде төндә ихатаңды сығып көрәйһең. Йәнәһе, башҡа кешеләр алдында минән дә шәберәк булып күренергә тырышаһың, ҡупырыш, - тигән ғәрсел күрше ихатаға ишаралап.

-Юҡты һөйләмә, мин, ғүмүмен, быйыл көрәккә лә тотонғаным юҡ. Ышанмаһаң, ҡара, бында ҡайҙа ҡар өйөмө күрәһең, көрәгән булһам, өйөмө лә булыр ине, - тигән күршеһе көләмһерәп.

-Беләм мин хәйләңде, ҡарынды көрәгәнһең дә, эҙ яҙлыҡтырыр өсөн балаларыңдан тышҡа сығарып түктергәнһең, - тигән һаман да ныҡышып ғәрсел күрше.

-Белгең килһә, беҙҙең сабыйыбыҙ тыуҙы. Яңыраҡ дауахананан алып ҡайттым. Шуға өс көн буйы беҙҙән кеше өҙөлмәй. Үҙең инеп тә сыҡмайһың. Бәпес күрергә, хәл белешергә киләләр беҙгә, бына шулар ихатамды тигеҙ итеп тапап бөтөргән дә инде, - тигән күршеһе һаман да үҙен тыныс тотоп.

Күршеһенең урамына нисек килеп ингән булһа, шундай уҡ хәлдә, шартларҙай булып тулышып сығып киткән ғәрсел күрше. Был ваҡиғанан һуң ул ҡотло күршеһен генә түгел, уға хәл белергә килеүсе ауылдаштарын да һүгергә, яман һүҙҙәр менән әрләргә тотонған. Ул шундай ҡарарға килгән: күршеһенең уңышлы булып йәшәүенең сере уның үҙендә түгел, ә ауылдаштарынан, уларҙың ярҙамынан икән.

Берҙән-бер көндө матур йортта йәшәүсе иртүк тороп, ихатаһына сыҡһа, тупһаһы янында йыуынты һыу тулы биҙрәне күргән. Аптырап тормаған ул, һыуҙы түгеп, биҙрәһен матур итеп йыуып, баҡсаһынан ҡыҙарып бешкән алмаларҙы тултырып, күршеһенең ишеген туҡылдатҡан. Битен-башын ыуалаған күршеһе ишекте асып, тупһаһына сығып баҫҡан. Алдында күршеһен күреп, ғәрсел күрше тәүге тапҡыр уға йылмайып баҡҡан. Үҙенсә ул "быны тәки сығырынан сығарҙым, үсемде алдым" тип уйлаған. Әммә ҡотло күрше биҙрәһен уға тотторған да, бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә, ҡайтыр яғына ыңғайлаған.

-Был алма беҙгә нимәгә? - тип аптыраулы мөнәсәбәтен белдергән ни эшләргә лә белмәгән ғәрсел күрше.

-Кемдең нимәһе бар, шуныһы менән бүлешә инде, - тип яуаплаған уға ҡотло күршеһе.

Үҙенең кемлеге хаҡында, шулай итеп, ҡотло күршеһенән белә алған ғәрсел күрше. Тик ул үҙенең мандып йәшәй алмауының, уңышһыҙ кеше булыуының сәбәбе фәҡәт үҙендә булыуын тулыһынса аңлай алдымы икән? Юҡтыр. Сөнки кешегә үҙенең асылын тулыһынса аңлап һығымта яһар, ыңғай яҡҡа үҙгәрер өсөн эгоизмы, кирелеге, саманан тыш ғорурлығы, күнел тиҫкәрелеге, тәкәбберлеге ҡамасаулай. Юғарыла бәйән ителгән ваҡиғалағы йыуынты һыу кинәйәһе оло мәғәнәгә эйә. Бәхтиһең, ғәрсел күрше быға тиклем күңелендә тик бысраҡты, негативты ғына йыйып йөрөгән икән. Бысраҡ уйлаған кешенең тойғолары ла бысраҡ була һәм ғәрсел күршенең барлыҡ уңышһыҙлыҡтарының сәбәбе тик үҙендә генә ята...

Кешелек ике принцип буйынса көн күрә: тәүгеһе - туғанлыҡ, икенсеһе - күршелек принцибы. Бындай бүленештә лә оло мәғәнә бар. Ни өсөн тигәндә, кеше үҙенең кемлеген ҡан туғанынан йә бауырҙашынан, милләттәшенән түгел, фәҡәт күршеһенән белешә, тик күршеһе генә уның кемлеген әйтеп бирә ала. Кем белә, бәлки, "Күрше хаҡы - тәңре хаҡы" мәҡәле лә тап ошо хәҡиҡәткә бәйлелер. Күршелек принцибы айырым ғаиләне генә түгел, тотош милләтте, дәүләтте үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе төшөнсә лә. Әйтәйек, беҙ үҙебеҙгә ысын баһаны күрше халыҡтарға, күрше дәүләттәргә барып, уларҙың күнитмешен ҡарағандан һуң ғына белә алабыҙ. Бындай осраҡта күршенең һиңә биргән баһаһы ла кәрәкмәй, аңлау үҙенән-үҙе килә.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Балалар баҡсаһы өсөн түләү 2014 йылдың апреленә тиклем 800 һумдан да артмаясаҡ. Был хаҡта БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Лилиә Ғүмәрова хәбәр итте. "Баланы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһына йөрөткән өсөн түләүҙе ике-өс тапҡырға арттырыу күҙалланмай, - тип белдерҙе Лилиә Ғүмәрова. - Федераль кимәлдә ҡабул ителгән "Мәғариф тураһында"ғы законға һәм алдағы ваҡытта аҙаҡҡы уҡыуҙа ҡабул ителәсәк шундай уҡ исемле закон проектына ярашлы, түләү механизмы ғына үҙгәрә. Бала ҡарау һәм белем биреү буйынса айырым билдәләнгән хеҙмәттәр өсөн айырым түләнәсәк".

✓Республика һуғыш ветерандары клиник госпиталенең баш табибы Хәлил Мостафин медицина өлкәһен үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне, госпиталь менән етәкселек иткәндә күрһәткән профессионализмы өсөн БР Хәрби хәрәкәттәр ветерандары йәмәғәт ойошмалары Координация советының "Хәрби ҡаһарманлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланды.

✓Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығы йыл һайын үткәрелә торған Бөтә Рәсәй табиптар конкурсына йомғаҡ яһаны. 13-сө ҡала клиник дауаханаһы табибы Вера Комкова, Стәрлетамаҡтың 1-се поликлиникаһы табибы Гөлнара Вәлиева, Өфөнөң ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһының урология бүлеге мөдире Рифҡәт Сәхипов, Белорет үҙәк район клиник дауаханаһының табибы Александр Дубровиндар призлы урындар яуланы.

✓"Тәбиғәткә бергәләп ярҙам итәйек" экологик программаһы сиктәрендә Башҡортостан баш ҡалаһында алты мең ҡарағай ултыртылды. Ойоштороусылар билдәләүенсә, Өфөлә үткән акция ярҙамында Подымалово ҡасабаһы эргәһендә урман массивы булдырыласаҡ, ул экологик хәлде яҡшыртыуға булышлыҡ итәсәк. 2011 йылда старт алған "Тәбиғәткә бергәләп ярҙам итәйек" экологик программаһы Рәсәй урмандарын һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән. Акция тормошҡа ашырыла башлағандан алып илдең төрлө төбәктәрендә 200 меңдән ашыу ағас ултыртылған.

✓Латвияның баш ҡалаһы Ригала Һабантуй-2013 байрамы үтте. Латвияның Милли-мәҙәни йәмғиәттәр ассоциацияһы биләмәһендә сараны "Латвия башҡорттары ҡоролтайы" яҡташтар берлеге ойошторҙо. Сарала Латвия, Литва, Эстонияның татар һәм башҡорт диаспоралары вәкилдәре - йәмғеһе өс йөҙгә яҡын кеше ҡатнашты.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Маҡсатыбыҙ - граждандарға уңайлы йәшәү шарттары булдырыу, тип юҡҡа ғына даими һыҙыҡ өҫтөнә алмай Ирек Ялалов. Сөнки бөгөн тормошҡа ашырылған барлыҡ проекттар ҙа тап ошо маҡсаттан сығып эшләнә.*



ТУҠТА, МӘЛ!













...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАЙРАМ АЛДЫНАН...

## өлгәшелгәндәр барланды

**Яңы йыл - үткәндәргә йомғаҡ яһау, киләсәккә бурыстар билдәләү мәле икәненә күнеккәнбеҙ. Ә бына Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм уның командаһы өсөн яңы форматта эш башлауға Яңы йыл да кәрәкмәй. Сөнки һәр тыуған яңы көн - ул яңы бурыстар, яңы маҡсаттар, миллионлы халыҡ йәшәгән баш ҡаланы граждандарҙың уңайлы йәшәү, эшләү, ял итеү ҡалаһына әйләндереү йүнәлешендәге эшмәкәрлек.**



Шуға ла хакимиәт башлығы ниндәйҙер арауыҡҡа йомғаҡ яһау өсөн йыл уҙғанын көтөп торманы - баш ҡаланың тыуған көнөн ҡаршылау уның ҡарамағына тап шундай үткәндәрҙе барлау, киләсәккә бурыстар билдәләү мәле. Ә бит һөҙөмтәләр ҙә юҡ түгел. Мәҫәлән, элек йылына 50-60 йорт ихатаһы ғына төҙөкләндерелһә, Ирек Ишмөхәмәт улы эшләгән йыл ярым ваҡытта 1000-дән ашыу йорт ихатаһы "икенсе һулышын" алған. "Ғәмәлдә беҙ ҙур күләмле эш башҡарабыҙ, ләкин бының менән генә мөрхәтһенмәй, алдыбыҙға тағы ла юғарыраҡ бейеклектәр ҡуябыҙ", - тине матбуғат конференцияһында Ирек Ишмөхәмәт улы.

Һөҙөмтәләр, ысынлап та, сағыштырғанда асыҡ күренә. Мәҫәлән, бығаса йылына торлаҡ төҙөү күрһәткесе 500-550 мең квадрат метр тәшкил итеп, уның яртыһын шәхси төҙөлөш алһа, былтыр күп һанлы йорттарҙағы фатирҙарҙың дөйөм майҙаны ғына 460 мең квадрат метр тәшкил иткән. Быйыл был күрһәткесте 550 мең квадрат метрға еткереү планлаштырыла. Яҡын киләсәкте күҙаллағанда, өс йылдан яуланасаҡ сик - 1 миллион квадрат метр, шул иҫәптән уның 800 мең квадрат метры индустриаль ысул менән төҙөләсәк.

Транспорт инфраструктураһын үҫтереү, социаль һәм коммуналь төҙөлөш өлкәһендә лә ыңғай үҙгәрештәр бар. Ләкин, күңел күҙең күрмәһә, маңлай күҙе - ботаҡ тишеге, тигән кеүек, уларҙы күрә, баһалай һәм рәхмәтле була белергә кәрәк. Юҡһа, талаптарыбыҙ ҙур, ә булғанды күрә һәм баһалай белмәйбеҙ. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бөгөн баш ҡалала алып барылған күпселек эштәр - инвесторҙарҙы йәлеп итеү һөҙөмтәһе. Апрель һуңында Өфө тағы ла үҙенең халыҡ-ара кимәлдә инвестиция ылыҡтырыу һәләтен раҫлай, 2013 йылда бизнес өсөн иң яҡшы 30 ҡала исемлегендә былтырғы һөҙөмтәһен ҡабатлап, тағы ла икенсе урынға сыға.

Инвестицияларға килгәндә инде, йылдың беренсе кварталында төрлө сығанаҡтарҙан 13,8 миллиард һум инвестиция йәлеп ителә. Әлеге ваҡытта дөйөм күләме 154 миллиард һумлыҡ 99 проект тормошҡа ашырыла. Был проекттар буйынса булдырылған дөйөм эш урыны 19 мең бөрәмек тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта ҡала хакимиәте башлығы ҙур-ҙур маркеттар селтәре төҙөүгә артабан рөхсәт бирмәйәсәге, ә урындағы эшҡыуарҙарға, үҙебеҙҙең инвесторҙарҙы үҫтереүгә иғтибар бүләсәген белдерҙе. Был аңлашыла: сит илдән килгән инвесторҙар бары тик үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта, һалымдар ситкә китә, ә ошо ерҙә тыуып үҫкән кешеләр киләсәген, балаларының, ейәндәренең яҙмышын хәстәрләй, ер-һыуға мөнәсәбәте хужаларса икәнен һәр кем белә.

Баш ҡалала спорт инфраструктураһы ла үҫеш юлында. Байрам алдынан 2000 квадрат метрлыҡ майҙанды биләгән балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе сафҡа индерелһә, "Нефтсе" стадионы реконструкция кисерә, яңы Параолимпия үҙәге төҙөлә. Киләсәктәге өс йылда баш ҡалала 10 бассейн иҫәпләнәсәк. Уларҙың береһе лә бюджет аҡсаһына түгел, ә инвесторҙар иҫәбенә төҙөлә. Шулай уҡ Өфөлә велосипедсылар хәрәкәте лә үҫешә. Алдағы биш йылға фаразлағанда, уларҙың һаны 30 меңгә етеүе ихтимал. Тимәк, Европа илдәрендәге кеүек, ҡайһы берәүҙәр автомобиль урынына велосипедты "ауыҙлыҡлаясаҡ". Бының өсөн шарттар ҙа, ҡаланың төньяҡ өлөшө менән көньяғын тоташтырыусы махсус юлдар ҙа буласаҡ.

Маҡсатыбыҙ - граждандарға уңайлы йәшәү шарттары булдырыу, тип юҡҡа ғына даими һыҙыҡ өҫтөнә алмай Ирек Ялалов. Сөнки бөгөн тормошҡа ашырылған барлыҡ проекттар ҙа, барлыҡ төҙөлөштәр ҙә тап ошо маҡсаттан сығып эшләнә, хатта ҙур баҙарҙар ҙа граждандарҙың ял итеү ихтыяжын иҫәпкә алып, мәҙәни ял итеү һәм күңел асыу комплексы форматында үҙгәртелә, заманға яраҡлаштырыла. Дөйөм алғанда һәм барлыҡ өлкәләрҙә лә шундай темптар менән барғанда - баш ҡаланың киләсәге өмөтлө.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң Орджоникидзе районында 26-сы олимпия резервындағы махсус балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе бүлексәһенең "Төньяҡ" спорт комплексы асылды. Комплексты асыу тантанаһында Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, төбәктең йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта ҡатнашты. Ҡунаҡтарға грек-рим көрәше, дзюдо, тхеквондо, өҫтәл теннисы, бокс, тренажер залдарын, сисенеп кейенеү һәм душ бүлмәләре, конференц-зал күрһәтелде.

✓"Онлайн өләсәй һәм ҡартатай" милли социаль программаһы сиктәрендә Өфөлә оло йәштәгеләрҙе компьютер белеменә өйрәтеү үҙәге асылды. Үҙәк Коммунистик урамы, 39 адресы буйынса Рәсәй дәүләт социаль университеты филиалында урынлашты. Был программа 2008 йылдан башлап тормошҡа ашырыла. Шул ваҡыттан алып Рәсәйҙең 46 төбәгендә 126 компьютер үҙәге асылған. Хәҙер бындай үҙәк Башҡортостанда ла эшләй башланы. Курстарға яҙылыу өсөн 8(347) 272-04-81 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында педагогия колледжын һәм башҡа урта һөнәри белем биреү учреждениеларын тамамлаусылар өсөн рус теле һәм әҙәбиәте буйынса бушлай курстар ойоштороласаҡ. Курстар 1 июлдә Башҡорт дәүләт педагогия университетының матбуғат үҙәгендә башлана. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн 8(347) 273-38-11 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓Башҡортостанда янғынға ҡаршы айырым режим индерелде. БР Урман хужалығы министрлығына урмандарҙа янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә күҙәтеүҙе көсәйтергә, урмандарҙа патруллек итеүҙе ойоштороорға ҡушылды. Республика башҡарма власть органдарына янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса саралар комплексын һәм янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәүгә контролде көсәйтергә, урманға яҡын урынлашҡан участкаларҙа усаҡ яғыуҙы, сүп-сар, сәнәғәт ҡалдыҡтарын, шулай уҡ ҡороған үлән яғыуҙы тыйырға ҡушылды.

✓БР Эшҡыуарлыҡ ойошмалары ассоциацияһы республика эшҡыуарҙарынан Һиндостан Республикаһының Рәсәйҙәге илселегендә ойошторласаҡ Башҡортостан презентацияһында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итә. Презентация Мәскәүҙә 27 июндә үтә. Был БРИКС саммиты алдынан үткәреләсәк сараларҙың береһе булып тора.

БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Йолаға әйләнеп бара инде: икенсе йыл рәттән, өсөнсө тапҡырға баш ҡаланың тарихи үҙәге булған Ленин урамы йәйәүлеләр өсөн байрам итер урынға әйләнә. Пушкин һәм Киров урамдары араһындағы арауыҡта транспорт ағымы туктатыла, юлдың ике яғы буйлап оҫталар күргәҙмәләре, сауҙа, дөйөм туҡланыу предприятиелары теҙелә. Улар үҙ эштәрен, үҙ тауарҙарын күрһәтә, тәҡдим итә, ә үҙешмәкәр һәм профессиональ артистар иһә йырбейеү менән өфөләрҙең күңелен аса.**

# ИҢ ҘУР БАҺАНЫ...

## ойоштороусыларға бирҙе халыҡ

"Өфө Арбаты"нда был юлы ла һөнәрселәр фестивале күп халыҡтың иғтибарын үҙенә йәлеп итте. Халыҡ кәсептәре һәм биҙәү сәнғәте оҫталары байрамға килеүселәрҙе сигеү-бәйләү эштәре, сәйлән менән эшләнгән биҙәүестәр, ҡағыҙҙан, таштан, керамиканан һәм ағастан яһалған төрлө әйберҙәр менән таныштырҙы, ғәҙәти булмаған һөнәрҙәргә өйрәнергә теләүселәргә шунда уҡ оҫталыҡ дәрестәре лә ойошторҙо. Һигеҙенсе синыф уҡыусыһы Хазыев Инсаф, мәҫәлән, күргәҙмәгә үҙе һәм атаһы эшләгән ағас әйберҙәрҙе алып килгән. Һандыҡтар, көйәнтәләр, гөл һауыттары, көндәлек тормошта кәрәкле башҡа кәрәк-яраҡтарҙы ҙур оҫталыҡ менән башҡарған улар. "Мин башлыса ағас әйберҙәрҙең енелерәк төрҙәрен эшләйем. Һандыҡ, көйәнтәләргә оҫталыҡ әлегә етеңкерәмәй. Шулай ҙа күргәҙмәләрҙә сығыш яһау, һатыу эше алып барыу минең өсөн ҙур мәктәп", - ти егет.

"Өфө Арбаты" идеяһы күптәргә оҡшай. Былтыр ҡаланың бер урамын йәйәүлеләргә биреү буйынса фекер алышыуҙар ҙа ойошторолғайны хатта. Варианттар араһында Ленин урамы ла бар ине. Фекер алышыуҙарҙан һуң, машиналар ағымы арҡаһында бер урамды тулыһынса йәйәүлеләргә биреү әле мөмкин булмаған эш, әммә ҙур байрамдарҙа быны ойошторорға була, тигән ҡарарға килende. Идея үҙен аҡлай шикелле. Ленин урамындағы саралары тамаша ҡылып, ошондай фекергә килергә була. Кешеләр ғаиләләре менән рәхәтләнеп ял итте, үҙешмәкәр артистарҙың концертын ҡараны. Сәнғәт академияһының йәш рәссамдары теләгән һәр кемгә портреттарын төшөрөп бирҙе. "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы эргәһендә тамашасы иғтибарына "Киләсәк ҡалаһы" тип аталған йәштәр арт-фестивале тәҡдим ителһә, "Кунаҡһарай" сауҙа йорто ҡаршыһында һигеҙ тапҡыр паралимпия чемпионы Оксана Савченко гимнастик күнекмә үткәрҙе. Балаларҙың мәнфәғәте лә уйланылғайны, улар өсөн төрлө конкурстар, уйындар ойошторолдо.

Ҡала ҡунаҡтарына ла байрам саралары оҡшаны. Грузиянан эш сәфәре менән килгән Вахтан Огиашвили юл ыңғайында урындағы халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте менән дә танышырға булған. Быға тиклем тик телевизорҙа ғына күргән ҡурайҙы ла беренсе тапҡыр тотоп ҡарауы. Ошо көпшәнән моң сығыуына ышанып бөтмәйенсә, ҡурайҙа өрөп тә ҡараны. Ҡурайсы егет уйнап күрһәткәс һәм уның урмандарҙа үҫкән үләндән яһалғанын әйткәс, Вахтан һоҡланыуын йәшермәне. "Шәп музыка ҡоралы. Урманда үҫкән үләндең шундай моң сығара алыуын шәйләп ҡалған халыҡ та моңло һәм талантлылыр", - тине Кавказ ҡунағы.

Дәүләкән районынан үҙе эшләгән ҡурайҙарҙы күргәҙмәгә алып килгән халыҡ-инструменталь ансамбле ойоштороусыһы һәм етәксеһе Роман Рогов янынан да кешеләр ағымы өҙөлмәне. Башҡорт милли музыка ҡоралына һөйөү урыҫ милләтле кешене ике йыл элек ҡурай эшләй башлауға этәрә. Әлеге көндә ул яһаған ҡурайҙарҙы республиканың ижади коллективтары, филармониялар һатып ала. "Халыҡ көйҙәрен яҡын күреү, уларҙы белеү генә сифатлы ҡурайҙар эшләргә булышлыҡ итә, ыңғай һөҙөмтә шул саҡта ғына була", - ти ул.

Ниндәй байрам көрәшһеҙ булһын инде! Баш ҡала хакимиәте кубогына көс һынашҡан батырҙарҙы йыйған "Ҡунаҡһарай" янындағы майҙансыҡ бик күп тамашасыны йәлеп итте. Көсөргәнешле бәйгенән һуң төп бүләк - скутер Федоровка районының Батыр ауылынан Рәдиф Аҡсуринға эләкте. Ауылы исеменә тап төшөрмәне егет. "Йылдар буйы шөғөлләнеүҙән һуң ғына еңеү килә. Ир-егет көслө, ныҡ булырға тейеш. Әлеге ваҡытта ауылымда балаларҙы көрәш серҙәренә төшөндөрәм", - тине донъя чемпионы.

Ретро-автомобилдәр күргәҙмәһе лә халыҡ араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Өфөләләр иғтибарына үткән быуаттың тәүге яртыһында сығарылған автомобилдәр тәҡдим ителде. Һәр теләүсе Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы һәм унан һуңғы йылдарҙағы "ГАЗ", "Волга", "Чайка" автомобилдәре янында фотоға төшә алды. Хатта 1938 йылғы "Мерседес" та бар ине күргәҙмәлә.

"Хас та һабантуйҙағыса булды. Киңәнеп ял иттек, таныштар менән аралаштыҡ. Беҙгә шундай матур байрам ойоштороусыларға рәхмәтлебеҙ", - тине байрамға килгән һәр кем. "Ҡара әле, бындай байрамды республиканың башҡа ҡалаларында ла ойоштороп булыр ине лаһа! Юҡһа, район халҡы һабантуйҙарҙа рәхәтләнеп байрам итә, ә ҡала халҡы йәйҙәрен ҡайҙа барырға белмәй..." - тип тә фекер белдерҙе Салауат ҡалаһынан килгән Илшат Хәмитов тигән ағай. Был матур өлгө шулай таралып та китер әле. Һәр хәлдә, Өфөбеҙ етәкселәренең был эше лә оло баһаға лайыҡ булды.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ.**

ТУҠТА, МӘЛ!











## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Көҙән йыйырыу

❖ Аяҡты көҙән йыйырһа, бер ҡул менән аяҡ бармаҡтарын тоторға һәм үҙеңә табан тартырға. Икенсе ҡул менән аяҡты тубыҡтан тубыҡ һөйәгенә табан ышҡырға. ❖ Йоҡларға ятҡанда эргәгә берәй металл әйбер ҡуйырға һәм көҙән йыйыра башлаһа, шул һалҡын металл әйберҙе көҙән йыйырған ергә ҡуйырға. ❖ Бүлмәлә кислород ҡытлығы булмаһын. ❖ Тел аҫтына валидол һалыу ҙа килешә. ❖ Бысаҡ осо менән генә электерелгән аҡбурҙы тел өҫтөнә һалырға ла, һыу менән йоторға. ❖ Төнгөлөккә йәшел дегәнәк япрағы ябып, бинт менән бәйләп ятығыҙ. ❖ Эрселмәй бешерелгән картуфты эҙеләй иҙергә һәм 1-2 ҡат етен туҡыма аша ауыртҡан урынға бәйләргә. Компресс һыуына барған һайын етен туҡыманы ала барағыҙ. Картуф һыуынһа, компресты алырға, ауыртҡан урынды одеколон менән ышҡырға, йылытырға.

### Тоҙло билбау

Бөйөрҙәр ауыртыуға бәйле булған (башҡа сирҙәр өсөн түгел!) юғары ҡан баҫымы менән яфаланғанда ҡалын ғына таҫтамал һымаҡ туҡыманы 3-4 ҡат бөкләргә лә, 9 процентлы тоҙ иретмәһенә манып, бил тирәһенә бәйләргә, өҫтөнән киң бинт менән урарға.

### Күҙгә арпа сыҡһа

Арпа сыға башлау менән 4-5 бөртөк еҙ төймә (пижма) сәскәһен сәйнәгеҙ һәм аҙағынан һыу эсеп ҡуйығыҙ. Быны көнөнә 3-4 мәртәбә, арпа бөткәнсе эшләргә.

### Тамаҡ ауыртҡанда

1 ҡалаҡ алма һеркәһен 1 стакан һыуға йәки алма һутына һалып, тамаҡты сайҡарға.

### Ирендәр ярылғанда

❖ Йоҡларға ятҡанда төнгөгә ирендәргә бал, ҡыяр йәки кишер һуты һөртөргә.

❖ Ҡырылған алма "бутҡа"һына аҡ май ҡушып яһалған ҡатнатма ла ирендәге һәм күкрәктәрҙәге яраланған урындарҙы дауалай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ Бер көндө транспорт туҡталышындағы бер машинаның артҡы тәҙрәһендә "Батшаларға башын эймәгәнде башҡаларға башҡорт баш эймәҫ" тигән яҙыуҙы күреп ҡалдыҡ һәм уның эргәһендә туҡтамай үтеп китә алманыҡ.



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ололар ауырыуҙары менән бәйле им-том

**Мейе ултыртыу.** Баш ауыртһа, мейе төшкән, тиҙәр. Уны таҫтамал алып, башты бәйләп, ҡаҡҡылап, урынына ултыртҡандар, имләгәндә ошолай һамаҡлағандар:

*Баш бармаҡ, ҡыҙыл еп, төк-төк төкөмә.*
*Һуҡ бармаҡ, һары еп, төк-төк төкөмә.*
*Урта бармаҡ, күк еп, төк-төк төкөмә.*
*Сәтәкәй бармак, аҡ еп, төк-төк төкөмә.*
*Бына һиңә биш айыл, дүңгәк булып ҡыйыл.*
*Ары-бире, ары-бире, ултыр сатҡа кире.*
*Ҡолаҡ барҙа, күҙең ҡайҙа?*
*Танау барҙа, күҙең ҡайҙа?*
*Телең барҙа, күҙең ҡайҙа?*
*Һапа барҙа, күҙең ҡайҙа?*
*Бер күҙең ҡояшта, икенсе күҙең айҙа.*
*Ҡояш сыҡһа, ай ҡалҡһа, ҡояш байый, ай бата.*
*Мейе тайпылды, ҡайпылды, үҙ эйәренә йәйпелде.*
*Һин дә төш, мөйөшкә боҫ, шөшкә төш.*

**Епте ҡырҡҡылап ташлау.** Баш ауыртһа, сәбәбен белер өсөн бау йәки еп менән башты үлсәйҙәр. Танау, елкә һәм ҡолаҡ төптәренә ҡарата бауға йәки епкә дүрт билдә һалалар. Унан һуң, ҡолаҡтар өҫтөндәге нөктәләр янынан тотоп, бауҙы һаҡ ҡына алып ҡуялар. Әгәр бауҙың маңлай һәм елкә яҡтары тигеҙ булһа, мейе төшөү булмаған, тип иҫәпләнә. Әгәр бауҙың маңлай яҡ өлөшө елкә яғыныҡынан оҙон булһа, мейе алға күскән, тип ҡарала йәки кирећенсә - елкә яғы өлөшө оҙон булһа, мейе артҡа күскән, тип билдәләнә. Башты үлсәү тамамланғандан һуң бауҙы ваҡ ҡына итеп ҡырҡҡылап ташлайҙар.

**Мейе үлсәү.** Мейе ҡағыусы бер ҡулы менән башын елкә яғынан, икенсе ҡулы менән маңлайынан тотоп, бер нисә тапҡыр иҙәнгә һуға. Әгәр һуҡҡанда яңғырауыҡлы тауыш сыҡһа, мейе күскән һанала, бындай тауыш булмаһа, мейе дөрөҫ ултыра.

## Муйын ҡайышын имләү

Муйын ҡайышы ауырыуы йыш осрай. Муйын ныҡ ауырта, ауыртыу башҡа ла атыла. Аҙаҡ ҡабырғаға, ҡалаҡ һөйәккә бирә, ҡулдар ойой. Был ауырыу булһа, муйынға сей тиренән ҡайыш һалалар. Ул булмаһа, ҡайышты кесерткәндән ишеп һалалар һәм ошо әпсенде:

*Атай баш, инәй муйын,*
*Атай ҡул, инәй ҡуйын,*
*Уң яҡты баҫам,*
*Һул яҡты асам,*
*Ете һөйәккә бер елем,*
*Бер елемгә биш тамыр.*
*Бер һыйпайым,*
*Ике һыйпайым,*
*Өс һыйпайым,*
*Дүрт һыйпайым,*
*Биш һыйпайым.*
*Иткә, һөйәккә ҡайыш*

- тип һамаклай-һамаҡлай, муйын менән баш араһын һыйпайҙар. Баштың күҙәнәктәре ҡыҫылһа, һыйпаһаң, асыла икән.

## Күҙ ауырыуҙары менән бәйле им-том

Күҙгә йылан тиреһе бәйләү. Күҙ ауыртһа, уға йылан тиреһе бәйләгәндәр. Бәйләгәндә өс-ете тапҡыр ошо әпсенде әйткәндәр:

*Аҡ йылан, ҡара йылан,*
*Йомро йылан, кит, йылан!*
*Баҡыр йылан, кит, йылан!*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ҺӘЙБӘТ БИТ!

**Елдәй елгән еңел автомобиль тәҙрәләрендә, ишектәрендә бөгөн ниндәй генә яҙыу күрмәҫһең. Улар үҙ эйәләренең характерын, машинаға, юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға, эргә-тирәһендәгеләргә, хатта бер ни тиклем тормошҡа, донъяға ҡарашын белдерә кеүек.**

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ ҘӘ... һабаҡ биреп ҡуя ҡай саҡ

Бигерәк тә "Ока", "Запорожец" кеүек автоларҙы йөрөтөүселәр ярата төрлө көлкөлө яҙыуҙарҙы. "Джиптың йәне" йәки "Киптерелгән кадиллак" тигән яҙыуҙар, ысынлап та, уҡыусыла йылмайыу тыуҙыра. Саңлы йәки бысраҡ тәҙрәләрҙә "Зинһар, мине йыу" йәки "Был - бысраҡ түгел, хәләл тир" тигән имза ҡалдыралар. Башҡортса, татарса йә ғәрәп хәрефтәре менән "Лә илләһә илләләһу", "Аллам һаҡлаһын!", Аллаһ бөйөк!" йәки "Аллаһҡа дан!" кеүек Хаҡ Тәғәләнең барлығын, берлеген раҫлаған яҙыуҙарға ла тиҙ өйрәндек. Һирәкһаяҡ булһа ла, "Мин - башҡорт!" тигән яҙыуҙар күренә башланы.

Бер көндө эштән ҡайтып барғанда транспорт туҡталышындағы бер машинаның артҡы тәҙрәһендә "Батшаларға башын эймәгәнде башҡаларға башҡорт баш эймәҫ" тигән яҙыуҙы күреп ҡалдыҡ һәм уның эргәһендә туҡтамай үтеп китә алманыҡ. Ундай яҙыулы автомобиль йөрөтөүсе, һис шикһеҙ, башҡорт рухлы, үҙенең телен, тарихын яҡшы белгән, милләте өсөн янып-көйгән, ҡыйыу фекерле кешеләр, тип уйлап, уның менән осрашып, һөйләшеү теләге барлыҡҡа килде.

"Резидент" такси хеҙмәте водителе Фәрғәт Имелбаев булып сыҡты ул. Күренекле башҡорт шағиры Рәми Ғариповтың шиғыр юлдары тураһында һөйләшергә теләүебеҙҙе белгәс, әңгәмәгә ихлас ҡушылды таксист ағай.

- Шиғыр юлдарын уҡыған һәр кемдә ниндәйҙер кимәлдә ғорурлыҡ уяныуын, уның ниндәй көскә эйә булыуын һәр ваҡыт тоям кеүек, сөнки уға бер кем дә битараф ҡала алмай. Хатта башҡа милләт кешеләре лә был яҙыуҙың руссаға тәржемәһе менән ҡыҙыҡһынғаны бар. Аңлатырға тура килә инде, - тине ағай киң йылмайып.- Шулай ҙа ул бөйөк шағирҙың шиғри юлдары хаҡында улым менән һөйләшһәгеҙ, яҡшыраҡ булыр ине, сөнки был яҙыуҙы машинама ул яҙып ҡуйҙы...

Альбертты табыу ҡыйын булманы беҙгә. Ул да атаһы менән бергә, дөрөҫөрәге, бер-береһен алмаштырып, бер үк такси хеҙмәтендә эшләй булып сыҡты. Көндөҙ руль артында - атаһы, төнгөлөккә улы ултыра. Дәрестәре төштән һуң булыуы ла ҡулай, сменаны тапшырып, ҡайтып ял итеп алыуына уҡырға китергә ваҡыт етә. Альберт Имелбаев - механика-технология техникумының 4-се курс студенты. Автомобиль йөрөтөү танытмаһы алғас та атаһы янына эшкә урынлаша һәм бына йыл ярым эш менән уҡыуын бергә алып бара. "Береһе икенсеһенә ҡамасауламаймы һуң?" тигән һорауға "Теләк булһа, икеһен дә бергә уңышлы атҡарырға мөмкин", булды яуабы.

Редакцияға егет Фидан исемле дуҫы менән килгәйне. Һорауҙарға ла күберәк икәүһе бергә яуап бирҙе. Күрше булып йәшәгән егеттәр икеһе ике мәктәпте тамамлап, береһе - техникумда, икенсеһе 42-се һөнәрселек лицейына уҡырға инһә лә, алты йыл элек башланған дуҫлыҡтары дауам итә.

Альберт Рәми Ғариповтың шиғырҙарын яттан уҡ белмәһә лә, уның билдәле әҫәрҙәре менән таныш. Әммә үрҙә аталған шиғри юлдарҙы әлеге дуҫы Фидандың футболкаһында күргәс, ул һүҙҙәр егеткә бөтөнләй икенсе төрлө тәьҫир итә һәм ул күп тә уйлап тормай, уны ҡала полиграфияларының береһендә йәбештерелә торған ҡағыҙға яҙҙырып, автомобиленең артҡы тәҙрәһенә элеп тә ҡуя.

Уйыбыҙ дөрөҫкә сыҡты. Егет туған теленә ҡағылышлы бер нәмәгә лә битараф түгел. 3-сө гимназияла уҡығанда уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәтен яратып өйрәнә, техникумда ла был фәндән тик "бишле" билдәләренә уҡый. Өйҙә атай-әсәһе менән генә түгел, дуҫтары менән дә урамда башлыса башҡортса ғына аралашырға тырыша. Урыҫ тиҫтерҙәре лә уны аңлай. Ғөмүмән, илһөйәрлек төшөнсәһе уға ят түгел. "Туған телеңдә һөйләшеү генә илһөйәрлеккә инәме?" тигән һорауға: "Үҙ телеңдә һөйләшеү - илһөйәрлектең беренсе билдәһе, тип уйлайым, сөнки телде белһәң, башҡортса тапшырыуҙарҙы, концерттарҙы ҡарарға була, башҡорт йырҙарын, музыкаһын аңлап тыңлайһың. Аңлаһаң - яратаһың, өйрәнәһең", - ти ул. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған кесе йәштәге балалар өсөн "Сәңгелдәк", республиканың күренекле шәхестәре хаҡында "Ауылыма ҡайтам", "Тәмле" тапшырыуҙарын яратып ҡарай.

Мәктәп программаһында ҡаралған иң иҫтә ҡалған темаһы - башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тормош һәм яу юлы. Тимәк, егет туған халҡының азатлыҡ өсөн көрәшен, унда башҡорттарҙың һуңғы сиккә тиклем ғәҙел көрәшкә тоғро булыуын белә. "Салауат Юлаев" хоккей командаһының һәр матчын ҡарарға тырыша, республика халҡының улар өсөн янып-көйөүен ватансылыҡ тойғоһо менән бәйләй ул. Шуның менән башҡортостандар бер ни тиклем легендар шәхескә ҡарата мөнәсәбәтен белдерә, тип иҫәпләй.

Башҡорт халҡының тарихын, данлы үткәнен мотлаҡ белергә кәрәклекте яҡшы аңлай ике дуҫ. Шуның өсөн мәктәптә Башҡортостан тарихына ҙур урын бирелергә тейеш, тип иҫәпләйҙәр. Туған тел, тарих, башҡорт йәштәре тураһында бик фәһемле, сағыу фекерҙәре менән дә бүлеште улар. Ҡала мөхитендә үҫкән йәштәрҙең күбеһенә, улар рухһыҙ быуын, тел, тарих, халыҡ төшөнсәләренә ғәмһеҙ, битараф, тип ҡарарға күнеккәнбеҙ. Ысынлап та, ҡайһы берҙә йәш быуын телде лә, тарихты ла, мәҙәниәтте лә белмәй, белергә лә теләмәй кеүек тойола. Тик беҙ, өлкәндәр, йыш ҡына йәштәр хаҡында ғәҙел фекер йөрөтмәүебеҙгә инанабыҙ. Альберт, Фидан кеүек илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр ҙә бар хәҙерге йәштәр араһында. Ундайҙар осраһа, ысын күңелдән шатланаһың, тантана итәһең.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ЕТМЕШ ҺӨНӘРЛЕ...

# БЕРӘҮ БУЛҺЫН... берәгәй булһын

**Эш юҡ, аҡса юҡ, тип кемдер берәү ҡулын һәлендергән мәлдә, ысуләмәлен табып, аҡса эшләгән йүнселдәр осрап тора. Ғафури районының Сәйетбаба ауылынан Закир Ишбирҙин шундайҙарҙан. Әлеге мәлдә ул халҡыбыҙҙың боронғо кәсептәренән булған балаҫ һуғыуҙы тергеҙеп ебәреп, ауылдаштарын эш урыны менән тәьмин иткән.**



- Башҡорт халҡы борон-борондан киндер, балаҫ һуғыу менән шөғөлләнгән. Шул йолаларҙы тергеҙеү маҡсатында өс йыл элек балаҫ һуғыу менән шөғөлләнә башланым. Ауылдаштар Айрат Яхин менән Юнир Ишбирҙиндән биш туҡыу станогы эшләтеп алдым. Бер нисә ҡатын-ҡыҙ балаҫ һуғыу эшенә өйрәнде. Еңел булмаһа ла, улар был һөнәрҙе тиҙ үҙләштерҙе. Әле биш балаҫ һуғыусыбыҙ бар, шуларҙың 2-3-әүһе даими рәүештә эшләй, эш хаҡы ала, - ти Закир ағай.

Балаҫтар заказ буйынса һуғыла һәм һатыла. Төп һатып алыусылар - сәйетбабалар һәм яҡын-тирәләге ауылдар халҡы. Ситтән дә заказдар бар. Быйыл Закир Ишбирҙин быйма баҫыу шөғөлөн дә яйға һалған. Был эш менән Ғаян Латипов һәм Марат Рәхмәтуллин шөғөлләнә. Быйма һатып алырға теләүселәр күп. Йөндө ауылдаштарынан йыйып алалар, был тәңгәлдә ҡытлыҡ кисермәйҙәр. Шулай уҡ киләсәктә һарыҡ йөнөн балаҫ һуғыуҙа ла ҡулланырға уйлайҙар. Әлегә тиклем был эш өсөн магазин ептәре ҡулланылған булған.

Ауыл ерендә эш тә, аҡса эшләү юлдары ла етерлек. Сәйетбаба ауылы ҡоролтайы ултырышы үткәргәндә Закир ағай ауылдаштары иғтибарына 80 төрлө һөнәр теҙмәһе тәҡдим иткән. Ул исемлектә таш сығарыу, шәхси тимерлек булдырыу, бура, аҡ балсыҡ һатыу, ағас әйберҙәр етештереү һәм башҡалар бар.

-Тырышҡанда, ата-бабаларыбыҙҙың бөтөн был һөнәрҙәрен аяҡҡа баҫтырырға була. Халҡыбыҙға сауҙагәрлек сифатын да үҙләштерергә кәрәк, - тигән фекерҙә Сәйетбаба йүнселе. - Юғиһә, ҙур көс һалып үҫтергәнде, етештергәнде күстәнәс итеп бушҡа өләшә лә ултыра беҙҙең башҡорт. Ә бит ошо тапҡан малынды һатып, үҙенде, ғаиләңде ҡарарлыҡ аҡса эшләргә була...

Сәйетбаба эшҡыуары, йүнселе, йәмәғәт эшмәкәре быны ла күҙҙән ысҡындырмаған. Ауылда бәләкәй генә баҙарсыҡ ойоштороп, халыҡты үҙенән артҡан итен, һөтөн, ҡаймағын һатһын өсөн бөтөн шарттар, мөмкинлектәр булдырғандар. "Һатып алыусылар һәр саҡ табыла, ял көндәренә генә ауылға йөҙгә яҡын машина менән ҡаланыҡылар ҡайта", - тип, һәр нәмәлә үҙ эше барлығын белдереп ҡуйҙы Закир ағай. Ә бит һәр ауылға ошондай ауыл тормошона, ауылдаштары яҙмышына битараф булмаған бер генә әүҙем кеше булыуы ла етер ине. Тик ул, Закир ағай Ишбирҙин кеүек, үҙ артынан башҡаларҙы ла эйәртә алырлыҡ булырға тейеш.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

✓ *Бигерәк тә бөгөн Салауат Хәмиҙуллиндың Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы тапшырыуҙарынан халҡыбыҙҙың хаҡ тарихы тураһында әллә күпме мәғлүмәт алабыҙ. Рәхмәт ошо журналисҡа.*



*ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!*



# ТАЯҠ ИКЕ БАШЛЫ...

## миҙал ике яҡлы

**Рәсәй Президенты Владимир Путин йыл һуңында "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы РФ Законына ҡул ҡуйғас, барыһы ла еңел һулап ҡуйҙы шикелле. Хәҙер инде республика парламентының шундай уҡ закон әҙерләүен һәм уны фекер алышыуға сығарыуын көтә башланыҡ. Әйтерһең дә, шунан һуң барлыҡ проблемалар бөтәсәк тә, тынысланып, иғтибарыбыҙҙы икенсе нәмәләргә йүнәлтәсәкбеҙ. Һәр хәлдә, шулай тойола.**

Ысынлап та, "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы закон беренсе уҡыуҙа ҡабул ителеү менән уның буйынса фекер алышыуҙар башланды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ла был изге эштән ситтә ҡалманы һәм сираттағы ултырышын ошо темаға арнаны.

Төҙәтеүҙәр бөгөн көн үҙәгендә торған, бигерәк тә "Белем биреү теле" тип аталған 6-сы статьяға ҡағылды. Башҡарма комитет ағзалары был статьяға түбәндәге пункттарҙы:

-"Башҡорт һәм рус телдәре, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре булараҡ, Федераль дәүләт белем биреү стандарттары сиктәрендә тигеҙ кимәлдә өйрәнелә. Башҡорт телен уҡытыу һәм өйрәнеү белем алыусыларҙың төрлө кимәлен иҫәпкә алып төҙөлгән дәүләт аккредитацияһына эйә булған белем биреү программаларына ярашлы тормошҡа ашырыла";

- "Башҡорт һәм рус телдәре профессиональ белем биреүсе мәғариф ойошмаларында тейешле йүнәлештә кадрҙар әҙерләүҙә Федераль дәүләт белем биреү стандарттары сиктәрендә өйрәнелә";

-"Башҡортостан Республикаһының урта һәм юғары профессиональ белем биреүсе мәғариф ойошмаларында профессиональ белем биреү программалары башҡорт телендә тормошҡа ашырыла ала";

-"Башҡорт (туған) теле һәм туған әҙәбиәт буйынса Берҙәм дәүләт имтиханының мотлаҡ булыуы тураһында. Уның һөҙөмтәләре Башҡортостан Республикаһы территорияһында урынлашҡан юғары һәм урта профессиональ уҡыу йорттарына ингәндә иҫәпкә алынырға тейеш" индереүҙе тәҡдим итте.

Шулай уҡ ултырышта ҡатнашыусылар Законда мәктәптәрҙе ябыуға, уларҙың эшмәкәрлеген туҡтатыуға ҡағылышлы статья булмаһа ла, "ауыл мәктәпкәсә белем биреү йәки дөйөм белем биреү, шулай уҡ мәктәпкәсә белем биреү һәм дөйөм белем биреү ойошмаһының филиалын үҙгәртеп ҡороу йәки ябыу ошо ойошма йәки филиал хеҙмәтләндергән ауыл халҡының сходы ризалығы менән генә тормошҡа ашырыла" тигән өҫтәмәне индереүҙе лә хупланы.

Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың сайтында ла закон буйынса фекер алышыуҙар ойошторолдо. Был - бәләкәй генә булһа ла демократияның бер күренеше булып тора. Әммә... Сайтта барған фекер алышыу, нигеҙҙә, хис-тойғолар, милли бүленеш буйынса бер-берендә кәмһетеүҙәр һәм "башҡорт теле мотлаҡ уҡытылырға тейеш" тигәндән ары китә алмай. Ә бит уйлап ҡараһаң, башҡорт телен уҡытыуҙы бер кем дә тыймай. Бары тик ниндәй башҡорт теле тураһында һүҙ барғанын ғына асыҡларға кәрәк. Мәғлүм булыуынса, бөгөн башҡорт теле дәүләт теле булараҡ һәм туған тел булараҡ өйрәнелә. **Туған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та ул, тәү сиратта, Рәсәй Федерацияһының Төп Законы нигеҙендә тормошҡа ашырыла: Закондың 68-се статьяһының 1-3-сө пункттары Рәсәй киңлегендә рус теленең дәүләт теле булыуын, субъекттар үҙҙәренең дәүләт телен индерә алыуын, барлыҡ халыҡтарға үҙ телен һаҡлау, уны өйрәнеү һәм үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырыуҙы гарантиялай.** Шул уҡ ваҡытта 43-сө статья Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын индерә. Белеүебеҙсә, Федераль стандарттар туған телдәрҙе уҡытыуҙы күҙаллай, тимәк, туған телдәрҙе яҡлай. Бөгөн барлыҡ белем усаҡтары Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы программалар буйынса белем бирә икән, ундағы туған телде уҡытыу сәғәттәре үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ (мәҫәлән, ике сәғәт). Был башҡорт теленә генә түгел, рус, татар, сыуаш һ.б. телдәргә лә ҡағыла.

Хәүефләнергә урын юҡ та һымаҡ, ләкин милли республикаларҙың Төп Закон менән яҡланған кеүек күренгән икенсе дәүләт телдәренә ҡурҡыныс янай. Сөнки Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын үҙгәртеү мөмкин түгел, ул Төп Законда ҡаралған һәм "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында"ғы РФ Законы ошо нигеҙҙә эшләнгән. Һәм тап ошо стандарттар дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт телен (башҡа милли республикаларҙа - уларҙың икенсе дәүләт теле булып торған туған телдәрен) ҡыҫырыҡлап сығарыуы ихтимал. Был күренеш Федераль дәүләт белем биреү стандарттарында ҡаралған теге йәки был предметты уҡытыу сәғәттәрен арттырыу иҫәбенә тормошҡа ашырыласаҡ (программала ҡаралған башҡа фәндәрҙе ҡыҫҡартыу мөмкин түгел, уҡыу сәғәттәрен арттырырға ярамай). Эйе, ҡулланылышта ул дәүләт теле булып ҡаласаҡ, әммә дәүләт теле булараҡ өйрәнелеүе икеле. Ул ваҡытта инде башҡорт теле булараҡ дәүләт телен мәжбүри уҡытырғамы, юҡмы, тигән бәхәстәргә лә сик ҡуйыласаҡ. Рус теле, Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле булараҡ та (сөнки ул төп дәүләт теле), туған тел булараҡ та һаҡланып ҡаласаҡ.

Нисек кенә оптимист булырға тырышҡанда ла, ысынбарлыҡ бөгөн шундай. Хатта "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы законға үҙебеҙ теләгәнсә төҙәтеүҙәр индергән осраҡта ла, бәхәсле мәлдәр тыуып, эш судҡа барып еткәндә, хоҡуҡ яҡлаусылар субъект ҡануниәтенә түгел, ә федераль ҡануниәткә, тәү сиратта, РФ Граждандар кодексына һәм РФ Конституцияһына мөрәжәғәт итә. Ә ундағы положениелар беҙҙең файҙаға түгел (мәктәптәрҙе ябыу мәсьәләһе буйынса ла шундай уҡ хәл).

Ахырҙа, "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы закон буйынса фекер алышыу - ул халыҡ алдында яуап тотҡанда "беҙ бит һеҙгә шундай мөмкинлек бирҙек" тип әйтергә вариант ҡына булды, тигән тойғо ла ҡалдыра. Эйе, таяҡ һәр саҡ ике башлы, тик уның ауыр яғы гелән халыҡ елкәһенә төшә. Миҙал да ике яҡлы, әммә халыҡҡа уның тут баҫҡан яғы ғына насип була. Хәйер, быға аптырайһы ла түгел, Рәсәй гербындағы сәмреғоштоң ике башы ике яҡҡа ҡарап тороуынан сығып фекер йөрөткәндә, уның миһырбанлы ҡарашы гелән икенсе яҡҡа ҡарап торғандай...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ШАҢДАУ*

# ҒИЛЕМ - ҠОРАЛ



**Гөлфиә Янбаеваның "Ата-бабам дәлилдәре бар" тигән кәлимәһен дауам иткем килә. Эйе, үҙеңдең, милләтеңдең, ата-бабаларыбыҙ ҡаҙанғандарҙы яҡлап дәлилдәр килтереү өсөн арҙаҡлы тарихсыларыбыҙҙың, рухлы журналист-яҙыусыларыбыҙҙың яҙмалары һәр саҡ беҙгә дөрөҫ йүнәлеш бирә. Милли баҫмаларҙы уҡыу кеше тирмәненә һыу ҡойоуҙан, халҡыңа ҡаршы эш ҡылыу, һүҙ һөйләүҙән һаҡлай.**

Ҡалала йәшәгәс, миңә лә үҙ тормошомда төрлө милләт халыҡтары менән тығыҙ аралашып йәшәргә насип булды. Әгәр сәйәси темаға һүҙ сыҡһа, кемдәрҙер башҡорттоң түҙемлеген, сабырлығын - ялҡаулыҡҡа, илен, ерен һаҡлап көрәшеүен, яугирлығын - һуғыш суҡмары булыуға тиңләп ҡуя. Бындай саҡта, әлбиттә, ауыҙ йомоп ултырмаҫҡа, хаҡ дәлилдәр менән ялғансылар, күрә алмаусыларҙың өнөн тығырға кәрәк. Ә дәлилдәр - китаптарҙа, гәзиттәребеҙ, журналдарыбыҙ биттәрендә. Бигерәк тә бөгөн Салауат Хәмиҙуллиндың Башҡортостан юлдаш телевидениеһындағы тапшырыуҙарынан халҡыбыҙҙың хаҡ тарихы тураһында әллә күпме мәғлүмәт алабыҙ. Рәхмәт ошо журналисҡа. Уның тапшырыуҙарын ҡарап, милләтем менән ғорурланырлыҡ күп өҫтөнлөктәрҙе белдем. Халҡымды яҡларлыҡ аң, зиһен йыйҙым. Белем һәр беребеҙгә кәрәк. Белмәгәндән икеләнеп, күптәр икенсе яҡҡа ауып китә, юғала. Кемдең ялҡауҙар, һуғыш суҡмарҙары рәтендә йөрөгөһө килһен? Халҡыбыҙға тәрән уйлап эш итеү, ҡабаланып, хаталарға юл ҡуймау кеүек сифаттар һалынған. Артҡа ҡарап фәһем алып, алға атлау юлдарын эҙләү, табыу өсөн уҡыу кәрәк. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Көслө - берҙе, белемле меңде йығыр", тип әйтмәгәндер. Ғилем - ҡорал, белем- көс. Беҙҙең наҙанлыҡ - дошманыбыҙ ҡоралы икәнен онотмайыҡ.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Боронғо замандарҙа, Т.Г. Байышев һүҙҙәренсә, байҙарҙың хужалығында аттарҙың һанын арттырыу өсөн ҡур малы бүленгән. Улар һайлап алынған бейәләрҙән һәм айғырҙарҙан торған. Был малдар эш өсөн файҙаланылмаған һәм һатылмаған. Даими яңырып торған аттар ҡур малы фондында билдәле йәшкәсә (15-17 йыл) тотолған. Улар фондтан бары тик йәрәхәт алғанда йәки ауырығанда ғына сығарылған. Бындағы бейәләр һауылмаған. Ҡур малдары һәр ҡайһыһында 20-40 бейә һәм бер айғыр булған бер нисә өйөрҙән торған.

Ҡур малдарынан алынған артымдан хужалыҡ-тотоноу өйөрҙәре тупланған. Һуңғылары хужалыҡта ҡулланылған, бейәләрен ҡымыҙ эшләү өсөн һауғандар.

Яҙғыһын ҡур малдары өйөрө лә, хужалыҡ аттары ла, айғырҙар үҙ-ара талашмаһын өсөн, бер-береһенән айырылған. Өйөрҙәргә имеүсе ҡолондарҙан тыш, йәш малдар яҡын ебәрелмәгән. Дүрт йәшкә тиклемге аттар һәм төрлө йәштәге эш аттары, шул иҫәптән һимертеүгә ҡуйылғандары, ҡыҫыраҡ өйөргә тупланған. Улар тоҡом ҡалдырыусы булып тормаған.

Көҙгө һәм ҡышҡы миҙгелдә, енси ихтыяж туҡтау менән, көтөргә уңайлы булһын өсөн аттар бер табунға тупланған, уларҙың һәр береһендә бер нисә өйөр булған. Аттар өсөн йылы биналар төҙөлмәгән, аҙыҡ әҙерләнмәгән, ҡар күпләп яуғанда, оҙайлы бурандар ваҡытында, тайғаҡ ваҡытта улар күпләп үлгән.

Башҡорттарҙа, ҡаҙаҡтар һәм башҡа малсылыҡ менән шөғөлләнгән халыҡтарҙағы кеүек үк, аттарҙың һәм башҡа хужалыҡ малдарының йәше һәм енесе буйынса номенклатура эшләнгән. Уларҙың атамаһын төҫтәре билдәләгән. Шулар араһында иң киң таралғаны: туры (гнедой), ерән (рыжий), саптар (саврасый), ҡара (вороной), күк (серый, голубой), һары (буланый), аҡбуҙ (белый, сивый), ала (сивый), бүртә (в яблоках) булған. Аттарҙы йәше буйынса ла төрлөсә атап йөрөткәндәр: яңы тыуған ике енестәге малдарҙың дөйөм атамаһы ҡолон булған. Енескә айырып, уларҙы айғыр ҡолон һәм бейә ҡолонға бүлгәндәр. Яҙғыһын тыуған һәм бер йәшкә тиклемге, яҙғыһын ялы һәм ҡойроғо ҡыҫҡартылған йәш аттар ҡырҡмыш (ябаҡ) тип аталған: айғыр ҡырҡмыш, бейә ҡырҡмыш. Бер йәштән 2 йәшкә тиклемге ат тай була. 2 йәштән 3 йәшкә тиклемге айғыр - ҡонан, бейә малы - ҡонажын; 3 йәштән 4 йәшкә тиклемгеһе - дүнән-дүнәжен. 4 йәштән өлкән айғыр (тоҡом ҡалдырыусы) - айғыр; енси өлгөргән һәм беренсе тапҡыр ҡолонлағанға тиклемге бейә - байтал; өйөрҙәге тоҡом айғыры - өйөр айғыры; беренсе тапҡыр ҡолонлаған бейә - бейә; өйөргә ебәрелмәгән теләһә ниндәй йәштәге айғыр - һәүерек; ҡолонламаған бейә - тыу бейә; оҙаҡ йылдар өйөрҙә булған һыналған өйөр айғыры - аҙау айғыр; ағымдағы йылда ҡолонламаған бейә - ҡыҫыр; теләһә ниндәй йәштәге алаша - алаша.

*✓ "Халыҡ ижад иткән ҡомартҡыны мөхәррирләү, уны төҙәтеү ярамай. Фольклор буйынса белгестең ана шул яҙылмаған ҡанундарҙы белмәүе йәки белмәмеш булыуы мине аптыратты", тине Ғайса Батыргәрәй улы.*

# Ҡомартҡыны мөхәррирләргә

## йәки "Урал батыр" эпосы

**2007 йылда үткән Ҡурайсылар союзы съезында сығыш яһаусы Башҡортостандың халыҡ шағиры, ул саҡтағы Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рауил Бикбаев ҡурайыбыҙға өҫтәлмә уйымдар яһап, уны төрлөсә "камиллаштырыуға" үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, изге ҡомартҡыбыҙ "Урал батыр" эпосын бераү ҙә үҙгәртергә, мөхәррирләргә ынтылмаған кеүек, шундай уҡ изге ҡомартҡы һаналған ҡурайыбыҙҙы ла үҙгәртергә ярамауы хаҡында әйткәйне. Халыҡ шағирының был һүҙҙәрен съезға килеүсе ике йөҙҙән ашыу ҡурайсы дәррәү алҡыш менән ҡабул иткәйне…**

Әммә, үкенескә күрә, изгеләрҙән-изге һаналған ҡомартҡыларыбыҙҙы ла мөхәррирләргә тырышыусылар, уның төрлө варианттарын "табып", сенсация яһаусылар күренә башланы. Улар бигерәк тә донъя ғалимдарының ҡандың гаплатөркөмдәре буйынса бөрйән ырыуы башҡорттарының Уралтауҙың иң боронғо вәкиле икәнлеген, уларҙың бынан 14-15 мең йыл элек ошо ерҙә йәшәүен иҫбатлағас, әүҙемләште. Билдәле булыуынса, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәргә лә 14-15 мең йыл самаһы һәм, ғалимдар раҫлауынса, ул һүрәттәр сюжеты буйынса "Урал батыр" эпосының йөкмәткеһенә тура килә. Тап ошо асыштан һуң хатта беҙҙең ғалимдар араһында ла "Урал батыр" эпосынының ерлеген башҡорт тарихынан айырып, "Көньяҡ Урал ҡомартҡыһы" итеп күрһәтергә тырышыусылар бар.

"Ватандаш" журналының быйылғы 1-5-се һандарында күренекле ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Әхмәт Сөләймәнов редакцияһында "Урал батыр" ҡобайырының оло варианты - "Оло "Урал батыр" тигән яҙмаһы баҫылды. Ғалим үҙенең баш һүҙендә был яҙманың барлыҡҡа килеү маҡсатын "Урал батыр" эпосын 1998 йылда ЮНЕСКО иғлан иткән "Кешелектең ауыҙ-тел һәм матди булмаған мәҙәни ҡомартҡылары гәүһәрҙәрен иғлан итеү" программаһына тап килтереү ихтыяжына бәйләй. Хуп. Изге теләк. Әммә "Оло "Урал батыр" тип аталған ҡобайырҙы уҡығанда беҙ унда башҡорт халҡының бер нисә эпосы уҡмаштырылыуын, башҡортсалап әйткәндә, "бутҡа"ны ғына күрәбеҙ. Эйе, хәҙерге заманда барыһын да оптималләштерәләр, ҡулайлаштыралар. Сығымы әҙерәк булһын өсөн почта бүлексәләрен, мәктәптәрҙе, гәзит-журналдарҙы, ауылдарҙы, өлкәләрҙе бергә ҡушалар, ҡанды ҡанға, анды аңға бутайҙар. Әммә был яһалма берәмек булдырыу күренеше беҙҙең һәр ҡайһыһы үҙаллы һаналған изге ҡомартҡыларыбыҙҙы, эпостарыбыҙҙы бергә ҡушыуға алып килер, тип күҙ алдына ла килтермәгәйнек. Бәлки, әкиәттәрҙәге Аҡъял батыр менән Ҡамыр батырҙы бер юлдан йөрөтөргә мөмкиндер, әммә, иң ябай логика күҙлегенән ҡарағанда, эпохаль фекергә эйә, төрлө дәүерҙә ижад ителгән эпостарҙы ҡушып, "боламыҡ"ҡа әйләндереү кәрәкме икән? Һеҙҙең вариантта беҙ белгән мәшһүр "Урал батыр" эпосы юҡҡа сыҡҡан бит, Әхмәт ағай, тип кенә әйтке килә бында...

"Ҡыҫҡаһы, "Урал батыр" ҡобайырын, уның дауамын көүҙәләндереүсе "Иҙел менән Яйыҡ", "Аҡбуҙат", "Минәй батыр менән Шүлгән батыр", уға эйәреп килеүсе "Ҡуңыр буға" эпостары серияһы, тотош алғанда, бер әҫәрҙең киҫәктәре тип ҡаралыуға хаҡлы һәм шуға лайыҡ. Фәндә ҡабул ителгәнсә, башҡа эпостар контексында урын алған тематик мотив һәм ярҙамсы сюжеттарҙы йә үҙаллы легенда рәүешендә йөрөгән әҫәрҙәрҙе кире ҡайтарып, ҡыҫҡа аннотация рәүешендә хәбәр ителгәндәрен тулы ҡанлы итеп тергеҙеп, шулай уҡ төп сюжеттың үҙ логикаһы буйынса, мотлаҡ "Урал батыр" ҡобайыры контексында урын табырға тейешлеге аңлашылып торған осраҡтарҙа тематик мотив йә сюжеттар өҫтәп, "Урал батыр" ҡобайырын ярым тәнҡиди йыйылма оло вариантын булдырыу, тулыһынса тәнҡиди йыйылма эпик сюжеттарҙы ҡайһы бер халыҡтарҙың милли эпос тип ҡабул итеү тәжрибәһе күҙлегенән ҡарағанда, һис тә яҙыҡ булмаҫ..." тип әйтә ғалим баш һүҙҙә. Һүҙ юҡ, "Оло "Урал батыр" ҡобайыры, әгәр ҙә уны шулай атап булһа, "Урал батыр" эпосын башҡа эпостар менән бер юҫыҡта киңерәк итеп ҡарау мөмкинлеген бирә. Әммә хикмәт шунда: әгәр ҙә яҙмаларҙың авторлығы "Әхмәт Сөләймәнов" тип ҡуйылған осраҡта ғына беҙ уны алҡышлап ҡаршы алып, был яңылыҡты хуплар инек. Тик хөрмәтле ғалимыбыҙ халҡыбыҙ ҡомартҡыһы тексына инеп, уны халҡыбыҙ исеменән яҙа. Уны мөхәррирләргә, башҡа өҫтәмәләр индерергә хаҡы-хоҡуғы бармы икән, ундай хоҡуҡты уға кем биргән, шуны белге килә? Мөхәмәтша Буранғолов, Ғәбит Арғынбаев, Хәмит Әлмөхәмәтов сәсәндәр был хәлгә ниндәй баһа бирер ине икән? Был - бер.

Икенсенән, билдәле ғалимәбеҙ, филология фәндәре докторы Розалия Солтангәрәеваның 2012 йылда "Башҡорт сәсән мәктәбе" тигән китабы донъя күрҙе. Әйтергә кәрәк, сәсәнлек традициялары тарихы, элекке һәм хәҙерге быуын сәсәндәре күсәгилешлелеге хаҡында әсбап булырлыҡ китап сыҡҡан. Ошо китаптың "Урал батыр тураһында ҡарһүҙ" тигән бүлегендә ғалимәбеҙ Хәйбулла районы ерлегендә эпостың яңы вариантына юлығыуы хаҡында бәйән итә. Уны райондың юҡҡа сыҡҡан Утарбай ауылында тыуып үҫеүсе сәсәниә Әсмә Усманова ғалимәгә һөйләп яҙҙырған, имеш. Әсмә апайға был ҡарһүҙҙе өләсәһе һөйләп ҡалдырған, имеш. Урынлы һорау тыуа: бына өс-дүрт тиҫтә йыл инде фольклор байрамдарында ҡатнашып йөрөгән сәсәниә Әсмә апайыбыҙ нинә фәҡәт бөгөн килеп ошо хазина хаҡында хәбәр иткән һуң? Башҡортостан телевидениеһында билдәле тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров "Шәжәрә" тапшырыуҙары алып барып, 1995 йылда бер тапшырыуҙы Әсмә Усманованың тыуған ауылының тарихына, унда сыҡҡан йырҙарға, легендаларға, таҡмаҡтарға бағышлай. Шул тапшырыуҙы телевидение архивынан алып, Әсмә апайҙың һөйләгәндәрен бер һүҙен ҡалдырмай, йотлоғоп тыңлап ултырҙым: "Урал батыр тураһында ҡарһүҙ" хаҡында — ләммим. Урынлы һорау тыуа: был ҡомартҡы Әсмә апай хәтеренең ҡайһы бөгөлөндә тороп ҡалғайны икән? Зиһен яҡтыртыусы өләсәйҙең ҡарһүҙе шул тиклем әһәмиәтһеҙ булдымы икән ул саҡта? Ниңә тапшырыуҙа һис юғы быға ишара ла яһалмай? Китаптың 242-244-се биттәрендә баҫылған 71 юллыҡ шиғри тексҭа барлығы 56 тапҡыр "бар" тигән һүҙ ҡабатлана. Белеүебеҙсә, беҙҙең телдә, бигерәк тә халыҡ ижады әҫәрҙәрендә исем-атамаларҙан тыш, мөнәсәбәт белдергән бер һүҙ ҙә кире ҡабатланмай. Әгәр ҙә әҫәр, ысынлап та, шундайын ҡомартҡыға дәғүә итә икән, уның теле лә быны раҫларға тейеш. Ә бында иһә, ул иң талантһыҙ шағирҙың шиғыры кеүек килеп сыҡҡан. Бер һүҙҙе рефрен өсөн булһа ла шунсама тапҡыр ҡабатларға шул тиклем ярлымы ни беҙҙең телебеҙ?

Хөрмәтле академигыбыҙ Ғайса Хөсәйенов элегерәк бер сит милләт ғалимының "Урал батыр" эпосын Мөхәмәтша Буранғоловтың үҙе яҙыуы хаҡында әйтеп, шик белдергәс: "Ундай эпосты яҙа алғас, Мөхәмәтша Буранғолов бәйғәмбәр булған бит", - тип әйтеп, тегенең ауыҙын ябыуы хаҡында һөйләгәйне. "Яҙылмаған ҡанун буйынса халыҡ ижад иткән ҡомартҡыны мөхәррирләү, уны төҙәтеү ярамай. Фольклор буйынса белгестең ана шул яҙылмаған ҡанундарҙы белмәүе йәки белмәмеш булыуы мине аптыратты", тине Ғайса Батыргәрәй улы "Ватандаш"та баҫылғандарға үҙ мөнәсәбәтен белдереп.

Эйе, шундайын әһәмиәткә эйә халыҡ ижады ынйыларының варианттары булырға тейешлеген берәү ҙә инҡар итмәй. Әммә, әгәр ҙә беҙ юғарыла иҫкә алған "варианттар" айырым китап итеп нәшер ителеп, ЮНЕСКО-ға тәҡдим ителһә, ундағы мифология характерын, донъя халыҡтары тарихын яҡшы белгән ғалимдар, ысынлап та, Ғайса Хөсәйенов һүҙенсә, шулай тип әйтәсәк: "Иптәш башҡорттар, "Урал батыр" эпосын һеҙ бит үҙегеҙ яҙғанһығыҙ..."

Әхмәт ағайҙы, Розалия апайҙы мин хөрмәт итәм, уларҙың халҡыбыҙ өсөн башҡарған хеҙмәттәрен баһалайым. Әммә уларҙың, бөгөн килеп, беҙ күҙ ҡараһындай һаҡларға бурыслы булған иң-иң изге ҡомартҡыбыҙға шундай мөнәсәбәте юғарылағы һүҙҙәрҙе яҙырға мәжбүр итте. Әгәр ҙә теге урыҫ әкиәтендәгесә, ул ҡомартҡыбыҙҙы һәр ҡайһыбыҙ ергә, һыуға, һауаға тартҡылай башлаһаҡ, уны танымаҫлыҡ хәлгә килтереп, бөтөнләй юғалтып ҡуйыуыбыҙ бар. Былай ҙа эпос тексына һәр яңы редакцияла баҫылған һайын үҙгәртеүҙәр индерелә килеүен дә яҡшы беләбеҙ. Ғалимдар бындай күренештәргә үҙ мөнәсәбәтен белдерер тигән өмөттәмен. **Ә бына данлыҡлы ҡомартҡыбыҙ яҙып алынған төбәктәге халыҡ вәкилдәре был хаҡта нимә уйлай һуң? Икенсе Эткол ауылы халҡы һөйләй:**

**Сәлимә ӘЛМӨХӘМӘТОВА, II Этҡол ауылының "Ағинәйҙәр" клубы рәйесе, Хәмит сәсәндең ейәнсәре:** "Ҡартатайыбыҙ Хәмит сәсән" тигән һүҙбәйләнеш беҙгә иҫ белгәндән алып таныш булды. Бикеш урыҫтары Нуғайҙарҙың ерен килеп баҫҡас, мировой судья булып эшләүсе ҡартатайыбыҙ уларҙы Һаҡмар аръяғындағы ауылдарына кире ҡайтара. Беҙ бала саҡта Нуғайҙан оло кешеләр килеп, ҡартатайыбыҙҙы хөрмәтләп иҫкә алып, аят бағышлай торғайны. Ололарҙың һәм әсәйемдең һөйләүе буйынса, Мөхәмәтша Буранғолов тәүҙә ҡартатайыма килгән. Ул өйҙә булмағас, Урге Изрискә Ғәбит сәсәнгә киткән. Шунан Ғәбит сәсән: "Ҡайнағамдың алдына төшөп һөйләмәйем", - тип, Мөхәмәтша Буранғоловты кире беҙҙең ауылға алып килә. Ғәбит сәсән ҡартатайымдың бер туған һеңлеһе Заһиҙә инәйемә өйләнгән була. Ҡартатайым, мировой судья булараҡ, мир эше менән күп йөрөгәнлектән, улар килеүгә һаман да ҡайтмаған була. Ғәбит сәсән Хәмит сәсәнде көттөрөп, уның йәйләүендә (ул урын хәҙер Хәмит утары тип атала) Бишҡайын һаҙлығында ҡорбан салдыра. Ҡорбанды салып бөтөп торғандарында өс һыбайлы оҙатыуында ҡартатайым ҡайтып төшә. Ул бәхәсле эштәрҙе хәл итеүсе кеше булараҡ, һәр ваҡыт һаҡсылары менән йөрөгән. Был ваҡытта халыҡ Әхмәров Әхмәткәрим байҙың ерендә, Байым талы һәм Са-



✓ ***Эпосыбыҙ донъя яуланы һәм яулай, һәм шул донъя яулаған "Урал батыр"ға хәҙер килеп кемдәрҙер үҙенең төҙәтмәһен индерә, нимәлер өҫтәй, үҙенең фантазияһын ҡуша. Мин быға һис тә риза түгелмен. Быны туҡтатырға кәрәк.***



# ЯРАМАЙ...

## яҡлауға мохтаж

рҙаҡ күле буйында бесән эшләп йөрөгән була. Халыҡ йәйләүгә йыйыла. Намаҙ уҡыйҙар. Ҡорбан итенән ауыҙ итәләр. Ошонан һуң сәсәндәр алмашлап Мөхәмәтша Буранғоловҡа "Урал батыр" ҡобайырын һөйләргә тотона. Халыҡ та, шулай уҡ сәсәндәр үҙҙәре лә ул мәлдә был әҫәрҙе эпос тип белмәгән әле, ул һуңынан ғына билдәле була. Хәмит сәсән башлап ҡурайҙа уйнаған, әҙерәк тынып торған да, ҡобайырҙы һөйләй башлаған, шунан тағы ла туҡталып ҡалып, кейәүе Ғәбит сәсәнгә ымлаған. Әсәйем мәрхүмә: "Ғәбит сәсән ҡобайырҙың эстәлегенә бирелеп, артҡа сигенеп, алға китеп "тулап" һөйләгән, ә Хәмит сәсән үҙен һәр саҡ тыныс тотҡан", - тип әйтә торғайны.

Мөхәмәтша Буранғолов улар һөйләгәнде ҡағыҙға төшөрә ултыра. Яҙа торғас, ҡараһы бөтә, уға атайыбыҙ Килдейәр ҡором ҡайнатып бирә. Халҡыбыҙҙың нисәмә быуат телдән-телгә күсә килгән ҡобайыры шулай беренсе тапҡыр ошо урында ғәрәп хәрефтәре менән аҡ ҡағыҙға теркәлә. Яҙып бөткәс, ошо урынға бейеклеге ике метр тирәһе булыр таш ултырталар. 1958 йылда мин Белорет педучилищеһында уҡып йөрөгәндә каникулға ҡайтҡайным. Колхоз игене баҫыуының сүп үләндәрен утап ҡайтып килгәндә, Бишҡайын һаҙлығына етәрәк тау башында ап-аҡ күлдәк-ыштан кейгән ауылыбыҙ аҡһаҡалы 83 йәшлек Абдулов Минһаж олатайҙың оҙон таш өҫтөндә ултырғанын күреп ҡалдыҡ. Ул беҙҙе саҡырып алды ла, үрҙә яҙылған тарихты һөйләне. Шунан ағайым Алтынғужа Хәмитов кешеләргә әйтеп, машина, трактор алып килеп, Дамир Байымов, Фәсхетдин Баймөхәмәтов, Әбүбәкер Әлмөхәмәтов, Зәйнитдиндәр менән ошо ташты соҡоп ултыртты. Ошо яҙылған кешеләр, үкенескә күрә, үлеп бөттө. Был хәлде, Мөхәмәтша Буранғолов тигән кешенең ауылға килгәнен һөйләгән Минһаж олатай 1971 йылда 96 йәштә донъя ҡуйҙы. Олатай быларҙы һөйләгәндә унын ейәнсәре 1935 йылғы Ғәшүрә Баймөхәмәтова, Хәмит сәсәндең ейәне Алтынғужа, унын ҡатыны Фатима Хәмитова һәм мин тыңлап торҙоҡ. Әсәйем мәрхүмә шулай уҡ Рыбаков тигән урыҫтың ике тапҡыр килеп тә, ҡартатайҙы күрә алмай киткәнен һөйләй торғайны. "Рыбак килде, ҡайнымды һорашты. Мин урыҫса бер һүҙ ҙә белмәһәм дә, "рыба"ның "балыҡ" икәнен белә инем", тип иҫләне ул йылдарҙы әсәйем.

Быларҙы ниңә һөйләйем? Быуындан-быуынға телдән һөйләнеп күсеп килеп, Хәмит һәм Ғәбит сәсәндәр ауыҙы менән һөйләнгән бөйөк ҡомартҡыны Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан аҡ ҡағыҙға яҙып ҡуйыу тарихын тағы бер ҡабат күҙаллатҡым килде. Кемдәрҙәндер ошо мираҫты үҙгәртергә тырышыуын ишеткәс, ултырып иланым. Тағы бер ғәҙелһеҙлек ишерелде өҫкә...

**Мораҙым ХӘЛИЛОВ, тарих уҡытыусыһы:** 1990 йылда Дәүләтбай ағай Ибраһимов "Сәсән мәңге тере" тигән сәсәндәр бәйгеһе ойошторҙо. Унда үҙебеҙҙең районҙан, күршеләребеҙ Әбйәлилдән сәсәндәр ҡатнашты. Мин дә сығыш яһаным. Шунда Хәмит сәсәндең ейәне Аҫылғужа ағай Баһуманов мәрхүм үҙенең "Олатайыма" тигән шиғырын уҡыны. Шиғырында эпос яҙып алынған урында таш ятыуы хаҡында һүҙ барҙы. 2006 йылда Баймаҡ балалар ижады үҙәге районыбыҙҙағы юғалып барған ҡомартҡылар буйынса эҙләнеү эше башлап ебәрҙе. Шул саҡ эпос яҙып алынған урынға өс сәсәндең таш ултыртып ҡуйыуы тураһындағы мәғлүмәт иҫебеҙгә төштө. Мәғлүмәтте Ғәшүрә, Сәлимә апайҙар аша иҫбатлап, 2008 йылда эпостың яҙып алынған урынына стела ултыртып, рәсмиләштереп ҡуйҙыҡ.

Әхмәт ағай Сөләймәновҡа әйтер һүҙем бар. Эпосты үҙгәртеү бигерәк тә ярамаған эш. Халҡыбыҙҙың Ҡөрьәнеләй һаналған изге ҡомартҡыны берәүҙең дә үҙгәртергә хоҡуғы юҡ.

**Разия МӘҮЛИТОВА, ветеран уҡытыусы:** Хәҙер шундай заман килде: кем йыбанмай, шул китап сығара. Китаптар күп ул, уларҙың күбеһен иғтибарға ла алмайһың. "Урал батыр" эпосына килгәндә, ул халҡыбыҙҙың ҡомартҡыһы, тарихы. Ғәйнислам улыбыҙ Төркиәгә барғас, уға эпосты төрөк теленә тәржемә итергә тәҡдим иткәндәр. Ул ауылға ҡайтып, иң тәүҙә беҙҙән рөхсәт-фатиха һораны. Эпостың төрөксәгә тәржемәһе 1996 йылда өс мең данала баҫылып сыҡты, изге ҡомартҡыбыҙ төрки телле милләттәргә, дәүләттәргә таралды. Шул ваҡытта йәш тарихсы Рөстәм Рәжәповтың "Йәшлек" гәзитендә "Урал батыр" донъя яулай" тигән мәҡәләһе баҫылды. Эпосыбыҙ, ысынлап та, донъя яуланы һәм яулай, һәм шул донъя яулаған "Урал батыр"ға хәҙер килеп кемдәрҙер үҙенең төҙәтмәһен индерә, нимәлер өҫтәй, үҙенең фантазияһын ҡуша. Мин быға һис тә риза түгелмен. Быны туҡтатырға кәрәк. Хәҙерге заманда әҙер ояға күкәй һалыусылар бигерәк күп. Кемдәрҙер данлыҡлы эпос янына үҙҙәренең исемен ҡуйып, тарихта ҡалырға тырышамы? Бының өсөн беҙҙе киләсәк быуындар ғәфү итмәйәсәк.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА, үҙәкләштерелгән Баймаҡ районы һәм ҡалаһы китапханалар селтәре директоры:** 1910 йылда Баймаҡ районы ерлегендә яҙылып алынып, аҙаҡ "Башҡорт халыҡ ижады"ның күп томлығына инеп, инде нисә тиҫтә йыл изге ҡомартҡыбыҙ булған "Урал батыр" эпосының беҙҙең зиһенде формалаштырыуҙағы роле баһалап бөткөһөҙ. Шул уҡ Әсмә апай Усманова менән Розалия апай Солтангәрәева ла бала сағынан ошо әҫәрҙе уҡып үҫкәндер. Әсмә апай менән беҙ сәсәндәр бәйгеләрендә лә осрашҡаныбыҙ булды. Әгәр ҙә уға был ҡомартҡыны өләсәһе һөйләп ҡалдырған булһа, ҡайҙалыр, ҡасандыр был турала иҫенә төшөрөр ине. Мин уның был ҡарһүҙ тураһында һүҙ күтәргәнен, мәҫәлән, хәтерләмәйем.

Бөгөн мин ғалимдарыбыҙҙың эспосыбыҙҙы донъя кимәленә күтәреүҙәре өсөн рәхмәтлемен. Тап шуның арҡаһында беҙҙә йыл һайын эпосты башҡарыу буйынса бәйге үтә, уны әллә нисәмә телдә һөйләйҙәр. Эпос бар донъяға таралды һәм, әлбиттә, уға ҡыҙыҡһыныу уянды. Шундай ҡомартҡыға һәр кемдең үҙен ҡыҫтырып, исемен ҡалдырырға тырышыуын хатта аңларға ла була. Ә бына бындай ҡыҫылыуҙарҙың киләсәктә нимәгә килтереүен уларҙың аңлап етмәүе мине борсоуға һала. Әгәр ҙә башҡорт халыҡ йыры "Буранбай"ҙы һәр ҡайһыбыҙ үҙенсә көй менән йырлай башлаһа, ул "Буранбай" булыуҙан туҡтаясаҡ. Башҡорт халыҡ йырына үҙенән нота өҫтәп йырлап булмай. Шуның кеүек, башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"ға ла ундай өҫтәүҙәр кәрәкмәй. Сөнки ул - ҡомартҡы. Ә ҡомартҡыға тейергә хаҡыбыҙ юҡ. Был юлға барыу гонаһ тип иҫәпләнә. "Урал батыр" эпосы халыҡ күңелендә ошо рәүешле һаҡланып, беҙгә килеп еткән икән, уны һаҡлау яуаплылығын бигерәк тә ғалимдар иң тәүге сиратта аңларға тейештәр. Тейеш кенә түгел, бурыслылар.

**Әкрәм ҠӘЙЕПҠОЛОВ, сәсән:**

*Халҡыбыҙҙың баҡсаһына*
*Көҙәне индермәгеҙ.*
*Эпос-сәскәне тапатып*
*Дегәнәк үҫтермәгеҙ.*
*Дағаланған ат янына*
*Баҡа һуҙа аяғын.*
*Баҡсабыҙға ултыртмаҡсы*
*Әрекмәндең таяғын.*
*Тарихты үҙгәртеүселәрҙең*
*Бармағын гипслайыҡ.*
*Бармаҡтары үҙҙәренә*
*Кәкере - онотмайыҡ.*
*Урал менән Аҡбуҙатҡа*
*Атланырға кем лайыҡ?*
*Кәпәс ҡайғыртҡандар түгел,*
*Уға лайыҡ тик халыҡ.*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әҙерләне.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юғарыла һүҙ барған күренештәр хаҡында бик күп ғалимдар һәм әҙиптәр менән һөйләшеп сыҡтыҡ. Әйтергә кәрәк, халҡыбыҙҙың бөйөк ҡомартҡыһы "Урал батыр" эпосына ҡарата бындай мөнәсәбәтте уларҙың береһе лә хупламаны һәм үҙҙәренең фекерен белдерер өсөн трибуна һораны. Был турала һөйләшеү ғалимдар ҡатнашлығында киңерәк планда дауам итер, тип уйлайбыҙ. Әлегә гәзитебеҙҙең әүҙем авторы, философия фәндәре кандидаты Закирйән ӘМИНЕВ теманы дауам итә...**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Үҙемдең ғилми тикшеренеүҙәрем "Урал батыр" һәм башҡа башҡорт эпостары менән бәйле булғас, Әхмәт Сөләймәновтың "Ватандаш" журналының быйылғы дүрт һанында баҫылған "Оло "Урал батыр" тигән йыйылма эпосын ентекләп уҡып сыҡтым. Минең уйымса, был әҫәрҙе "Урал батыр" эпосы, тип түгел, ә Әхмәт Сөләймәновтың үҙ ижады тип ҡарарға кәрәктер.**

"ЮНЕСКО ойошмаһында теркәйбеҙ", тип, "Урал батыр" ҡобайырын үҙгәртеүҙе, уға өҫтәмәләр индереүҙе бер нисек тә хуплап булмай. ЮНЕСКО исемлегенә индерһендәр ҙә, ти. Шунан, уны сит-ят яҡтарҙа һөйләп, ятлап йөрөрҙәр, тип уйлайһығыҙмы? Уның буйынса ғилми тикшеренеүҙәр барлыҡҡа килер, тиһегеҙме? Өмөтләнмәйек. Мин быға ышанмайым, сөнки быға тиклем бындай хәлдең булғаны юҡ, бер ҡасан булмаҫ та. Шулай булғас, ЮНЕСКО талаптарына яраштырабыҙ, тип, ниңә башҡорттоң иң боронғо эпосына йоғонорға? Эпосты Мөхәмәтша Буранғолов Хәмит һәм Ғәбит сәсәндәрҙән нисек ишетеп яҙып алған, ул шул көйө бер ниндәй үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш. Беҙ хәҙер Ғәбит һәм Хәмит сәсәндәрҙең был эпосты нисек һөйләгәнен дә, уны тыңлап, ҡағыҙға теркәп ултырған Мөхәмәтша Буранғоловтың ниҙәр кисергәнен дә әйтә алмайбыҙ. Әгәр Әхмәт Мөхәммәтвәли улы Мөхәмәтша Буранғолов нимәнелер аңламаған, бутаған тип уйлай икән, ул ғалим булараҡ, үҙенең уйҙарын ғилми мәҡәлә йәиһә китап итеп баҫтыра ала. Бындай эште атҡарыу уның иркендә. Ә эпосҡа тейергә ярамай.

Йәшерен-батырыны юҡ - беҙҙең халыҡтың бай боронғо мираҫы күптәрҙең эсен көтөрләтә, йәненә тейә. Ундай көнсөл кешеләр беҙҙең боронғолоҡто ла, бай рухи мираҫҡа эйә булғаныбыҙҙы ла бер нисек тә ҡабул итә алмайынса, төрлө уйҙырмалар тыуҙырып, беҙгә бысраҡ өйөргә генә тора. Шул иҫәптән, "Урал батыр" эпосының боронғолоғон инҡар итергә йәки күрмәҫкә тырышалар. Миңә "Урал батыр"ҙы Мөхәмәтша Буранғолов үҙе уйлап сығарған, тигәнде бер нисә кешенән ишетергә тура килде. Философ Дамир Жәүәт улы Вәлеев бындай уйҙырмалар тураһында, көлөп, Мөхәмәтша ҡарт шундай эпосты тыуҙыра алғас, ул бит XX быуаттың Гомеры, иң бөйөк шәхестәрҙең береһе, ти торғайны. Башҡорт ғалимдары рухи мираҫыбыҙҙы тикшергәндә бик һаҡсыл булырға тейеш. "Ҡаш төҙәтәбеҙ, тип, күҙ сығарып ҡуймайыҡ", йәки медиктарҙың "Зыян итмә!" ("Не навреди!") принцибын онотмайыҡ.

Яңы эпос тыуҙырыуҙар мәҙәниәт өлкәһендә булған, булып тора. Мәҫәлән, мордва халҡында эпос юҡ. Әммә мордва халыҡ ижадына таянып В.К.Радаев "Сияжар", А.М.Шаронов "Масторава" тигән эпостар ижад иткән. Был эпостар буйынса бер нисә кандидатлыҡ һәм хатта докторлоҡ диссертациялары яҡланы ул халыҡ вәкилдәре. Мордва ғалимдары В.К.Радаевтың "Сияжар" эпосын, Пушкиндың "Руслан менән Людмила"һы кеүек, фольклорға эйәреп яҙылған поэма, автор ижады, тигән фекерҙә. Шуға күрә, Ә.М.Сөләймәновтың тыуҙырған әҫәрен "Урал батыр" эпосының ҡануни тексына бер ҡыҫылышы булмаған яңы әҙәби әҫәр, авторҙың шәхси ижады, тип ҡарарға кәрәктер.

Әгәр ҙә беҙҙең ғалимдарыбыҙ, эпостың ниндәйҙер урыны аңлашылмай, тип иҫәпләй икән, әйҙә, тикшерһендәр, үҙҙәренең уй-фекерҙәрен дәлилләп яҙһындар. Том-том китаптар сығарһындар эпос тураһында. Тик әлегә эпос тураһында уҡыусыны ҡыуандырырлыҡ, уның зауҡына, хәҙерге заман талаптарына яуап бирерлек хеҙмәттәр күренгәне юҡ. Һаман булһа эпостың эстәлеген тасуирлауҙан ары китә алмайбыҙ, тип әйтергә була. Ғалимдарыбыҙ ошо бөйөк ҡомартҡыбыҙҙы төрлө йәһәттән өйрәнеп, уға һалынған серҙе, кодты асмаған (бәлки, асырға ла ярамайҙыр), эпосҡа әле тарихсылар, антропологтар, философтар, лингвистар, этимологтар, психологтар, медиктар, этнологтар, этнографтар, физиктар, математиктар, химиктар, биологтар, зоологтар, географтар, астрономдар һ.б. "логтар" үҙ баһаһын бирмәгән. "Урал батыр" эпосының поэтикаһы мәсьәләһе лә әле үҙ ғалимын көтә. Әлбиттә, эпосҡа теге йәки был юҫыҡта урыҡ-һуруҡ тикшерелеү үткәрелә, әммә улары ла "филологик ҡараштан" алыҫ китә алғаны юҡ кеүек.

"Оло "Урал батыр"ҙы яҙыуҙың кәрәклеген иҫбат итеү өсөн карел-финдарҙың "Калевала"һына һылтаныу бигүк урынлы түгел. "Калевала"ны тәшкил иткән руналарҙы Элиас Леннрот үҙе ижад итмәгән, ә карел, финн ауылдары буйлап йөрөп, крәҫтиәндәрҙән яҙып алған һәм шуларҙы бергә тәртипкә, ипкә, килтереп, "Калевала" тигән эпосты тыуҙырған. Финн, карел ғалимдарының тикшереүҙәренән күренеүенсә, "Калевала" руналарының 94 проценты - халыҡ ижады, ә ҡалған алтыһы иһә руналарҙы бер-береһенә тоташтырып, ялғап, логик тәртипкә килтергән саҡта бәйләнеш ролен үтәүсе Элиас Леннроттың өҫтәлмәләре. Тимәк, ул Элиас Леннрот ижады түгел, ә халыҡтыҡы булып сыға. Әлегә тиклем - Элиас Леннрот "Калевала"ны тулы яҙып алмаған, төҙәтергә кәрәк, тигәнде ишетергә тура килгәне юҡ.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**философия фәндәре кандидаты.**

*✓ Бер нәмәң дә булмайынса, һаулығың булһа - бынан да шәп нәмә юҡ. Нәмәләрең күп булһа, долларҙарыңды ҡайҙа илтергә, кемгә ҡалдырырға белмәһәң - бына ҡайҙа ул ҡыйынлыҡ,- тип яуаплай Шевчук.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Алтын тирмә" телевикторинаһын күптәр түҙемһеҙлек менән көтөп алалыр, моғайын. Кемдәрҙер был тапшырыуҙы зиһенен байытыу, халҡыбыҙ лөғәтенең онотолоп барған ҡайһы бер һүҙҙәрен отоп алыу өсөн ҡараһа, бәғзе берәү иһә, республикабыҙҙа йәшәгән матур ғаиләләр менән танышыуҙы үҙ күрә. Тапшырыуҙы алып барыусы Башҡортостандың халыҡ артисы Нәғим Нурғәлинды күрергә теләгәндән телевизор ҡабыҙыусылар ҙа юҡ түгелдер. Шулай ҙа был тапшырыуҙың бөгөнгө уңышы проекттың режиссеры, етәксеһе Хәбирә Хәмиҙуллина исеме менән бәйле икәнен күптәр белмәйҙер ҙә. Хәбирә апай менән проекттың үҙенсәлеге, унда ҡатнашыусылар тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

# "АЛТЫН ТИРМӘ" ГЕНӘ ТИГӘНДӘРЕ...

## эсе тулы аҡыл, уй икән...



"Алтын тирмә" проекты ижадсылары.

### Халҡыбыҙҙың аҡыл һандығы

"Алтын тирмә" тапшырыуына тиклем беҙҙең ижади төркөм "Мин башҡортса һөйләшәм" тигән тапшырыу әҙерләп сығара ине. Көндәрҙән бер көндө етәкселек әлеге программаны туҡтатып тороп, икенсе программа - башҡортса телевикторина башларға тәҡдим итте. Иң тәүҙә тапшырыуҙың атамаһын уйлап таптыҡ: "Алтын тирмә". Уның атамаһы тапшырыуҙың формаһына, йөкмәткеһенә лә йөгөнто яһаны, тиһәк, хата булмаҫ. Артабан декорациялар буйынса эҙләнеүҙәр китте, уларҙы күп тапҡырҙар үҙгәрттек, байыттыҡ һәм, һәҙәмтәлә, алтын төҫтәргә мансылған иҙәнле, алтын тирмә фонындағы матур студия барлыҡҡа килтерә алдыҡ. Рәссамыбыҙ Салауат Мөхәмәтшин студияны матур итеп биҙәп бирҙе. Ҡайһы бер кәрәк-яраҡтарҙы икенсе тапшырыуҙарҙан алып торҙоҡ, шулай иткәс, проектыбыҙ аҙыраҡ сығымлы булып килеп сыҡты. Ә тапшырыуҙың эстәлегенә килгәндә, ижади төркөм менән төн йоҡолароыбыҙҙы йоҡламай уйлана торғас, төп йүнәлеште билдәләнек һәм: "Матур ғаиләләр, матур хеҙмәт коллективтары ҡатнашлығында тамашасы яратып ҡарарлыҡ шоу булырға тейеш ул", - тигән һығымтаға килдек.

Тапшырыуҙа ике команда ҡатнаша, ике командаға ла бер һорауға яуап биреү бурысы ҡуйыла. Яуап бирер алдынан дәүҙәселәр етеҙлектә лә һынала - махсус төймәләргә кем алдараҡ баҫып өлгөрә, шуға ғына әлеге һорауға яуабын әйтеү хоҡуғы бирелә. Унан һуң, коллектив менән уйлаштыҡ та, был проектта халҡыбыҙ вәкилдәре йырларға ла, бейергә лә, шиғыр һөйләргә лә - үҙ һөнәрен, талантын күрһәтергә тейеш, тигән ҡарарға килдек. Был беҙҙең шоуҙы тағы ла йәнләндереп ебәрә, тип иҫәпләйбеҙ.

Тапшырыуыбыҙҙың тамашасылар араһында киң таныу ялауында, һис шикһеҙ, уның халыҡсан булыуы сәбәпселәр, тим. Башҡортостан телевидениеһында бер ваҡытта ла телевикторина булғаны юҡ ине. Ә телевикторина, баҡтиһәң, тамашасыла унда ҡатнашыу, ярышыу, үҙ көсөн һынап ҡарау теләге уятыуы менән үҙенсәлекле икән. Хәҙер инде беҙ етмештән артыҡ тапшырыу эшләнек, унда йөҙ егермендән артыҡ ғаилә ҡатнашты. Башҡортостанда билдәле сканвордсы-кроссвордсы Илдар Ғәбитов эстәлекле һорауҙарҙы менән тәьмин итә, беҙҙең менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Күпселек һорауҙарҙы Гөлфиә Назарова исемле ҡыҙыбыҙ төҙөй. Әлбиттә, тапшырыуыбыҙҙың Башҡортостан мәғлүмәт киңлектәрендә танылыу ялауында авторҙарыбыҙҙың өлөшө лә ҙур - улар беҙҙе төрлө-төрлө һорауҙары менән байыта, тапшырыуҙан-тапшырыуға тәмләп ҡулланырлыҡ һорау-күстәнәстәрен ебәреп, беҙҙе ҡыуандыра. Рәхмәт барыһына ла.

### Матур ғаилә - ил күрке

Тәүҙә "Алтын тирмә"гә бары тик ғаиләләрҙе генә саҡырҙыҡ. Республикабыҙҙа матур, аҡыллы балалар тәрбиәләгән, башҡаларға өлгө булырлыҡ ғаиләләргә ҡытлыҡ юҡ, иншалла. Бындай ғаиләләрҙе беҙ нисек табабыҙ? Республикабыҙҙың матбуғат баҫмалары, шул иҫәптән интернет та ярҙамға килә. Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите беҙҙең тапшырыуҙың фекерҙәше, дуҫы ла, беҙҙе һәм беҙҙең ҡатнашыусыларыбыҙҙы тапшырыу һайын бик матур бүләктәре менән ҡыуандырыусы бағыусы ла...

Ғаиләләр менән эшләй-эшләй, үҙебеҙ өсөн ҡайһы бер ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр яһалды. Шуларҙың ҡайһы берҙәре менән уртаҡлашып китәйем әле. Башҡорт ғаиләһенә бик матур бер күренеш хас: ир менән ҡатын аңлашып, бер тамырҙан, бер төптән эш итеүсән. Ире ни әйтә, ҡатыны шуның менән риза була, йәки - киреһенсә, ҡатыны әйткәнде ире хуплап тора. Береһе ниндәйҙер ҡарарға килһә, икенсеһе был ҡарар менән шунда уҡ килешә. Низән килә был? Моғайын, бер-берендең ҡараштарын, фекерҙәрен алдан уҡ тойомлай, бер-берендә аңлай белеүҙәндер. Ә бындай ғаилә ағзалары тураһында "Былар үҙ яртыларын тапҡан, былар бер-береһенә иш килгән" тиҙәр. Ғаилә ҡиммәттәре бер аҙ төҫһеҙләнә башлаған әлеге мәлдә, моғайын да, беҙҙең тапшырыуҙа ҡатнашыусы матур ғаиләләр өлгөһөнөң тәрбиәүи көсө лә барҙыр, тигәнгә ныҡлап инанам.

Тағы ниндәй һығымталар яһалды? Тапшырыуыбыҙҙа ҡатнашҡан матур ғаиләләрҙең һәр береһенең халҡыбыҙға әйтер һүҙе була. Бындай ғаиләләр, ҡағыҙға булараҡ, үҙ ырыу шәжәрәһен дә яҡшы белә, башҡорт халҡының тарихына, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә ҡарата үҙенсәлекле фекер йөрөтә. Был яҡтан көньяҡ-көнсығыш районларында йәшәгән ғаиләләр айырым иғтибарға һәм ихтирамға лайыҡ. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ла ҡалышмай. Әле яңыраҡ ҡына Асҡын районының Иҫке Ҡаҙансы ауылында йәшәгән Мәмдүнә һәм Зөлфәкәр Ғафуриәновтар ғаиләһенә һоҡландыҡ. Ошондай ғаиләләргә ҡарап, тотош ауылдар тураһында фекер йөрөтөргә булалыр, тип уйланыла.

Республикабыҙҙа икенсе йыл рәттән "Айыҡ ауыл" конкурсы үткәрелә. Был хәрәкәтте хуплаусы һәм үҙҙәре лә әүҙем ҡатнашыусы ғаиләләр ҙә беҙҙең тапшырыуға саҡырыла. Айыҡ ғаилә икән, уға, әлбиттә, айыҡ аҡыл, тәрән фекерләү, татыулыҡ, донъя, киләсәк өсөн борсолоу хас. Башҡорт ғаиләләренә ҡағылышлы тағы бер күҙәтеү: беҙҙең ҡайһы бер уйындарҙа "капитан" ролен ҡатын-ҡыҙҙар башҡара. Әллә ир-ат камера алдында ҡаушай, әллә ҡатын-ҡыҙҙың телгә әүәҫерәк булыуы сәбәпсеме быға - ни тиһәң дә, был күренеш беҙҙең иғтибарҙы йәлеп итте. Башҡорт ир-егеттәре тормошта ла "капитан" түгелме икән ни, тигән һорау тыуа ирекһеҙҙән. Ни тиһәң дә, ираттың ғаиләһен әйҙәп алып йөрөтөүенән дә матурыраҡ күренеш юҡ бит, тигән ишара ла яһап ҡуяйым әле...

Тағы ла, ауылда йәшәүселәрҙең белеме ҡалаңыҡыларға ҡарағанда тәрәнерәк булыуы асыҡ күренә. Ауылдарҙан килеүсе командалар әҙәбиәтте лә яҡшыраҡ белә, гәзит-журнал, китап уҡыуҙы ла онотмаған, шуға ла белемлерәктәрҙер. Ә ҡала кешеһе, ни өсөндөр, матбуғат баҫмалары уҡыуҙы һирәгәйтте. Белемһеҙ кешене ауыл кешеһе менән сағыштырған булалар, юҡ шул, ауыл кешеһе, киреһенсә, аҡыллыраҡ та, белемлерәк тә бөгөн. Бөгөн һәр кем интернетта ултыра. Ә, бер уйлаһаң, интернет белемле итмәй бит кешене - уҡыу белемле итә. Бына ошондай ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та һығымта яһалды беҙҙең аҡыл һәм белем ярышҡан телевикторинала.

Пландарға килгәндә, артабанғы йылдарҙа ошо тапшырыуҙа төрлө коллективтарҙы, хатта ауылдарҙы бер-береһе менән осраштырырға уйлайбыҙ. Был йәһәттән айыҡ коллективтарҙы, айыҡ ауылдарҙы саҡырыуға өҫтөнлөк биреләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙ борон-борондан йомаҡтар, сәсәнлек оҫталығын һынай торған әйтештәр ятатҡан. Халыҡ экиәттәрендә, мәҫәлән, батырға ниндәй ҙа булһа бер ҡаршылыҡты үтеп сығыр өсөн мәргән яуап талап иткән йомаҡ сисергә тура килә. Экиәттәрҙән тыш, беҙҙең көндәргәсә телдән-телгә күсеп, һаҡланып ҡалған сәсәндәр әйтештәренең формаһы әлеге лә баяғы йомаҡ ҡойоу жанрына барып тоташа. Йомаҡ әйтеү күренеше әлеге көнгәсә ауылдарҙа йәшәүсе ололарҙа һаҡланып ҡалған. Бына ошо матур ғәҙәтте бөгөнгө заман технологияларына яраҡлаштырып, халҡыбыҙға яңы һынланышта күрһәтеүе менән дә алдыралыр был тапшырыу.**

Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АҠЫЛ ЕТКЕРҘЕ ШЕВЧУК

Башҡортостан юлдаш каналында барған "Времечко" тапшырыуында Рәсәйҙең эстрада йырсыһы, яҡташыбыҙ Юрий Шевчук менән әңгәмә бара. Бына тура эфирға берәү шылтырата:

-Тормош ауыр, нисек йәшәргә? - тигән һорау бирә Мәскәү ҡунағына.

- Тәүҙә булған нәмәләреңде барларға кәрәктер, шунан яуап бирергә булыр, - ти Шевчук.

- Ә бер нимә лә булмаһа?- ти шылтыратыусы кеше.

- Булмаһа, бигерәк тә яҡшы. Бер нәмәң дә булмайынса, һаулығың булһа - бынан да шәп нәмә юҡ. Нәмәләрең күп булһа, долларҙарыңды ҡайҙа илтергә, кемгә ҡалдырырға белмәһәң - бына ҡайҙа ул ҡыйынлыҡ, - тип яуаплай Шевчук. Ошондай шәп аҡыл еткерҙе шулай телевизор ҡараусыларға Өфөлә тыуып үҫеп, үҙ таланты менән Мәскәү тарафтарын яулаған яҡташыбыҙ.

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

✓ *Мин Башҡортостандың урыҫ телендә боҙоп яҙылған йөҙҙән артыҡ тарихи атама исемлеген төҙөнөм. Уны топономия хеҙмәте ултырышында тикшереп, раҫлау өсөн юғары органдарға тәҡдим итмәксебеҙ.*



*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

**Ер-һыу атамалары - тыуған төйәгебеҙҙең, телебеҙҙең байлығы, баһалап бөткөһөҙ оло хазинаһы. Башҡорт Википедияһы ирекмәне Рөстәм Нурыевтың ошо байлыҡты өйрәнеү, ауыл исемдәренең башҡортса һәм урыҫса дөрөҫ яҙылышы мәсьәләһен күтәреүе бик урынлы. Мин әле уның "Киске Өфө"лә (2013 йыл, №14) баҫылып сыҡҡан "Ауылдарҙың исемен барлайыҡ" тигән мәҡәләһен күҙ уңында тотам.**



# ЕРҘЕҢ ТЕРЕ ХӘТЕРЕ

Авторҙың фекерҙәре һәм тәҡдимдәре менән нигеҙҙә килешәм. Башҡорт Википедияһында Башҡортостан топонимдары тураһында мәғлүмәт бирелеүе лә ыңғай күренеш. Шул уҡ ваҡытта был эштә ҡатнашыусылар иң элек топонимияның ғәйәт ҡатмарлы фән тармағы, тел белеменең махсус тикшеренеү өлкәһе икәнлеген иҫәпкә алһын ине, тип әйткем килә. "Был эшкә белгестәр генә түгел, ә барлыҡ йәмәғәтселек ҡушылһа, эш ырамлы һәм нәтижәле булыр", ти автор. Бер ҡарағанда, дөрөҫ тә кеүек. Ләкин һүҙ бит был урында тыуған төйәген белгән, тел, тарих, география буйынса мәғлүмәтле булған энтузиастар тураһында барырға тейеш. Шулай ҙа һәр бер атаманың дөрөҫ яҙылышы мәсьәләһе йә иһә этимологияһы, барыбер, махсус әҙерлекле белгестәрҙән башҡа хәл ителмәй. Ә ҡайһы ваҡытта айырым атама буйынса ғына ла тикшеренеүҙәр үткәрергә тура килә. Автор телгә алған Сыуалкин тигән йылға һәм ауыл исеме тураһында ла шул уҡ фекерҙе әйтер инем. Ярай, 1926 йылға һәм уға тиклемге урыҫса исемлектәрҙә ул Чувалкиново тип тә яҙылған икән, ти. Шунан сығып ҡына, топономик һүҙлектә бирелгән аңлатманы телгә лә алып тормайынса, уға, имеш, "һыуы һалҡын - сыуы салкын, йәки чыуы чалкын" тигән шаҡҡатырғыс "аңлатма" биреү урынлымы? Ә әлеге рәсми белешмәләрҙә ауыл атамаһының яҙылышында хата киткән булһа, йәғни Чувалкипово яңылыш Чувалкиново тип бирелгән булһа, ни әйтерһең? Быны бит яңы материалдар табып, тикшереп ҡарарға кәрәк. Картографияла, элекке рәсми белешмәләрҙә ундай хаталар бихисап. Йыш ҡына яҙылышы буйынса оҡшаш (п-н, н-к кеүек) хәрефтәр буталып китеүсән. Бер миҫал килтерәйем. Шишмә районында, Келәш менән Ар ауылдары араһында, автомобиль юлы Наҙыяҙ тигән бер үҙән аша үтә (уның шишмәһе Димгә барып ҡушыла). Карталарға ул урыҫса, һүҙ башында К хәрефе менән, Казыяз булып инеп киткән. Шунан сығып, юл буйындағы күрһәткескә башҡортсаһын да Ҡаҙыяҙ тип яҙып ҡуйғандар. Был атаманың дөрөҫ әйтелешен мин Ҡараяҡуп ауылындағы оло кешеләрҙән һорашып яҙып алдым, Мостай Кәримдең әҫәрҙәрендә лә ул нәҡ ана шул Наҙыяҙ формаһында телгә алына. Шуның өсөн дә хатаны, әлбиттә, төҙәтергә кәрәк. Әйткәндәй, мин Башҡортостандың урыҫ телендә боҙоп яҙылған йөҙҙән артыҡ тарихи атама исемлеген төҙөнөм. Уны топономия хеҙмәте ултырышында тикшереп, раҫлау өсөн юғары органдарға тәҡдим итмәксебеҙ. Унда Наҙыяҙ (Казияз) тигән атама ла инderelde.

2007 йылда донъя күргән "Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль төҙөлөш" исемле рәсми белешмәлә тәү башлап республикабыҙҙың барлыҡ ауыл атамаларының башҡортса яҙылышы билдәләнде. Был ғәйәт ҙур күләмле эш булды. Унда, ысынлап та, айырым хаталар барҙыр. Алла бойорһа, киләсәктә уларын да төҙәтербеҙ. Яңыраҡ Асҡын районында әҙәбиәт байрамында ҡатнашып, ауылдар менән танышып йөрөргә насип булды. Үршәҙелә ауыл атамаһының урындағы әйтелеше тураһында һораштым. Алда телгә алынған белешмәлә беҙ уны Үршиҙе тип алғанбыҙ. Ләкин мәктәптә директор ҙа, музей мөдире лә, беҙ уны Үршәҙе тип йөрөтәбеҙ, тинеләр. Ә шул уҡ ваҡытта Нуриман районында, мәҫәлән, Оло Шиҙе, Мишкәлә - Оло Шаҙы ауылдары бар. Нисек итергә? Телебеҙҙә, тимәк, шиҙе һәм шәҙе варианттарының икеһе лә ҡулланыла. Шуға күрә Үршәҙе тигәндә урындағы әйтелеш үҙенсәлеген иҫәпкә алырға кәрәк буласаҡ (Ә Оло Шаҙы атамаһында шаҙы компоненты шул уҡ шәҙе һүҙенең ҡалын әйтелешле варианты). Был йәһәттән, Һөләймән һәм Сөләймән тигән ауыл атамалары тураһындағы фекерҙәр менән дә килешмәйенсә булмай.

Башҡортостан һәм, ғөмүмән, Көньяҡ Урал топонимияһы быуаттар дауамында урыҫ телендәге ғилми әҙәбиәттә, картографияла, һәр төрлө белешмәләрҙә, тарихи документтарҙа теркәлеп килгән. Башҡорт ер-һыу атамаларының урыҫса яҙылышында бик күп хаталар урын алған, күп осраҡта танымаҫлыҡ үҙгәрештәр барлыҡҡа килгән. Шуның өсөн дә, урыҫса яҙылыш нормаларына төҙәтеү индереү менән бергә, топонимдарҙың башҡорт телендәге дөрөҫ әйтелешен билдәләү баһалап бөткөһөҙ мөһим проблема булып тора. Икенсе яҡтан, башҡорт топонимия донъяһы хәҙерге республика территорияһы менән генә сикләнмәгәнлеген дә иҫтә тоторға кәрәк. Йәғни топонимияны өйрәнеү, ер-һыу, ауыл, ҡасаба, ҡала атамаларының башҡортса дөрөҫ әйтелешен яҙып алыу һәм бергә туплау эшен тарихи Башҡортостан киңлегендә алып барырға тейешбеҙ. Башҡорт матбуғатында ла был мәсьәләгә иғтибар даими бүленеп торһон ине.

**Рәшит ШӘКҮР,**
**яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор.**

*БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ*

# ҠУНАҠСЫЛЛЫҠТЫҢ...

## бынан да юғарыраҡ үре юҡтыр



**Байрамда сит ҡитғаларҙан да ҡунаҡтар булды. Ҡытай, Төньяҡ Осетия-Алания, Польша, Ҡаҙағстан, Латвия, Чад, Ҡырғыҙстан, Нигерия, Төркиә, Һиндостандан килеп, "Берҙәмлек" Халыҡ-ара милли мәҙәниәттәр фестивалендә ҡатнашыусылар Ҡырмыҫҡалы, Ғафури райондары, Салауат, Күмертау ҡалаларынан һуң, 12 июнь Өфөнөң Ленин майҙанында фестивалдең Гала-концертында сығыш яһаны. Дуҫлыҡ, теләктәшлек һәм татыулыҡты берләштергән был фестиваль, башҡорт ере һәм башҡорт халҡы уларҙың күңелендә ниндәй тойғолар уятты һуң? Һүҙ - баш ҡала ҡунаҡтарына.**

**Алан Габараев, "Бонварнон" Халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе, Төньяҡ Осетия-Алания Республикаһы:** "Берҙәмлек" фестивалендә ҡатнашыусыларҙы тотош республика халҡы яҡты йөҙ менән ҡаршы алды: уйлап ҡараһаң, бәләкәй генә бер байрам да әллә күпме кешегә шатлыҡ алып килә ала икән. Үҙенсәлекле, милли колоритлы байрамығыҙ - "Һабантуй" бик оҡшаны. Көрәшселәрҙе күҙәттем, бейек һырғауылға менгәндәрен ҡараным. Өҫтәлдәр һыйҙан һығылып тора, биш көн эсендә алдыбыҙға ниндәй генә затлы ризыҡ ҡуйманылар. Бындай ҡунаҡсыллыҡ өсөн рәхмәт. Кавказ халҡы ҡунаҡсыл, тигән булалар, башҡорт халҡы беҙҙән һис тә ҡалышмай! Тағы ла башҡорттар ныҡ ихлас халыҡ, быны мин бөгөн генә түгел, дүрт йыл элек тойғайным. Ул саҡта Башҡортостанға беренсе тапҡыр "Байыҡ" телевизион фестивалена килгәйнем, шунан алып башҡорт ере мине үҙенә тартып тора. Ҙур теләк менән киләм, бында яҡын дуҫтарым күп, хәҙер инде улар үҙҙәре минең тыуған еремә ҡунаҡҡа килә. Кешеләрҙең бер-береһенә шатланып, аралашып йәшәүенән дә ҙурыраҡ ҡиммәт булыуы мөмкинме һуң?

Башҡорт бейеүҙәре дәртле генә түгел, матур ҙа, йырҙарығыҙ моңло, йырсыларығыҙ ғына түгел, һәр башҡорт кешеһе лә үҙенсәлекле тауышҡа эйә, барыһы ла йырсы, барыһы ла бейеүсе. Милли костюмдар хайран ҡалырлыҡ, ә башҡорт ҡыҙҙары тураһында әйтеп тораһы ла юҡ! Бик арыһаҡ та, аралашыу шатлығы, төрлө мәҙәниәттәр менән танышыу, үҙендәкен күрһәтеү мөмкинлеге көс бирә.

Өфөнөң үҙәк урамында ойошторолған күргәҙмәләрҙә ҡыҙыҡлы әйберҙәр күп ине. Балаларҙың ағастан һырлауҙары, туҙҙан әйберҙәр эшләүе һоҡландырҙы. Бында мин, ғәҙәтемсә, башҡорт балы һатып алдым.

**Ли Цинь Хуа, художество коллективы етәксеһе, Ҡытай:** Байрамға бик алыҫтан, Ҡытайҙың Гуандун провинцияһынан килдек. Тамашасы беҙҙең башҡарыуҙа "Һыңармөгөҙ" бейеүен күрҙе. Унда спорт та, бейеү ҙә, хатта һуғыш сәнғәте элементтары ла бар. Төркөм махсус артистарҙан тормай, беҙ барыбыҙ ҙа төрлө урындарҙа эшләйбеҙ, ә буш ваҡытыбыҙҙа бейейбеҙ. Ҡытайҙа һыңармөгөҙ дейеү, феникс, гөбөргәйел менән бер рәттән, изге йәнлек иҫәпләнә һәм ул Гуандун провинцияһында йәшәгән Хакка халҡының тотемы һәм талисманы булып тора. Ксиаожинкоу ҡалаһының был бейеүенә 300 йыл, ул Цин династияһы императоры Цяньлун идара иткән ваҡыттан килә. Был бейеүҙе башҡарып, беҙ яҡшы көн, тыныс, мул тормош, уңыш, оҙон ғүмер юрайбыҙ. Ғөмүмән, һыңармөгөҙ - ул бәхет символы, беҙ һеҙҙең ерегеҙгә бәхет алып килдек.

Өфө ҡалаһы бик оҡшаны, ул Ҡытай ҡалаларынан шул тиклем айырыла. Һауаһы таҙа, ә күк йөҙө шундай зәңгәр! Башҡортостанға килмәһәм, бындай зәңгәр күкте күрә алмаған булыр инем. Беҙҙә бик эҫе, иң түбән температура 8-9 градус йылы, ә бында бер көн эсендә бер юлы дүрт миҙгелдең торошон тойорға мөмкин. Урындағы халыҡ беҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе аңламаҫ инде, тигән хәүеф булғайны башта, юҡҡа көйәләнгәнбеҙ икән. Бында ҡунаҡсыл, йырсы, бейеүсе, күңелсәк һәм шат кешеләр йәшәй. Милли аҙыҡтар тәмле, әммә бер аҙ ят, көн һайын шулай туҡланһаң, һимерәһеңдер ул, тип уйлайым. Шулай ҙа бындағы халыҡ һомғол һәм матур, ә бына йөрәктәре ҙур, уларҙың күңеленә тотош донъя халыҡтары ла һыйыр ине.

**Ян Бродка, "Ziemia Zywiecka" Халыҡ бейеүҙәре һәм йырҙары ансамбле етәксеһе, Польша:** Ансамблдең тарихы бик бай, ул 40 йыл элек төҙөлгән һәм Живец ҡалаһы халыҡ бейеүҙәрен күрһәтеү маҡсатында эшләй. Башҡортостанға беҙ 30 кешенән торған ҙур төркөм менән килдек, сөнки беҙ күрһәтергә теләгән милли йолаларыбыҙ тамашасыға тейешенсә тәьҫир итә алмаҫ ине. Әйткәндәй, төркөм үҙешмәкәр артистарҙан тора. Мин үҙем 22 йыл элек Башҡортостанда булғайным, был йылдар арауығында республикағыҙ тағы ла күркәмләнгән икән. Коллективтағы йәштәр үҙҙәрен шул тиклем бәхетле тойоп йөрөй, иҫ киткес ҡунаҡсыл ер, ҡунаҡсыл кешеләр. Башҡорт халҡы үҙенең тәбиғилеген юғалтмаған, шуныһы миңә бик оҡшаны. Ихлас, шаян халыҡ, йөҙҙәренән йылмайыу китмәй. Беҙҙең Польшала тауҙарҙа йәшәгән кешеләр ҙә шулай ихлас, хатта улар ошо яҡтары менән башҡорттарға оҡшаған, тип әйтер инем. Фестиваль күңелдә тик ыңғай тәьҫораттар уятты.

Өфө көнө бында бер көн генә байрам ителә икән, беҙҙә бындай саралар өс көнгә һуҙыла. Беренсе көндө спорт ярыштары үтә, икенсе көндә мәҙәни саралар ойошторола, өсөнсө көндө иһә халыҡ бейей, күңел аса.

(Дауамы 16-сы биттә).

✓ *Беҙгә лә ошо "киммәттәр"ҙе тараталар түгелме? Һәм иң осло уҡтар милләт әсәләре, тәрбиәселәре һәм ғаилә усағы һаҡсылары булған гүзәл заттарға, шул иҫәптән һиңә йүнәлтелә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МУЗЫКА, СПОРТ, ЙОҠО...
## баш мейеһен һауыҡтыра

■ Баш мейеһе музыка тыңлағанда, спорт менән шөғөлләнгәндә, йоҡлағанда һауыға. Бынан тыш, табиптар мейе сәләмәтлеген һаҡлау өсөн ноутбук һәм кеҫә телефоны менән һирәгерәк ҡулланырға тәҡдим итә. Баш мейеһе ауырыуҙар хәүефен төрлө факторҙар, мәсәлән, насар экология, стрестар, аҙ хәрәкәтләнеү, дөрөҫ туҡланмау, техноген көсөргәнештәр тыуҙыра. Улар хәҙерге заман кешеһенең сәләмәтлегенә һәм иң тәү сиратта, баш мейеһенә кире йоғонто яһай, тип билдәләй белгестәр. Уларҙың фекеренсә, мейе ауырыуҙары 2030 йылға йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре һәм онкологияны ла үтеп китәсәк. "Күпселек белмәй ҙә, әммә күп нәмәгә бәйле булыу, экологик хәл, сифатһыҙ аҙыҡ-түлек, даими стресс - былар цивилизацияның кире күренештәре генә түгел, ә инсультҡа, аҡылдан яҙыуға, психик тайпылыштарға килтереүсе факторҙар. Фастфуд менән туҡланып, ашҡаҙанға ғына түгел, аҡыл зәғифлеге хәүефен көсәйтәбеҙ. Музыка кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, шулай уҡ ауыр депрессив хәлдән сығыры һәләтенә эйә. Ошондай уҡ көскә спорт, кино, уңайлы йыһаз эйә", - тип иҫәпләй профессор Алексей Данилов. Профессор әйтеүенсә, бөгөн мейе ауырыуҙарын дауалауҙа сәнғәт һәм мәҙәниәт ярҙамға килә. Мәсәлән, фототерапия, музыкаль терапия, ҡом, урман терапияһы кеүек заманса ысулдар менән баш мейеһе сирҙәрен дауаларға була. "Ноутбукты өйҙә ҡалдырып, смартфонды һүндереп, йөйәү йөрөү энергетик потенциалды 50 процентҡа күтәрергә мөмкинлек бирә. Әммә кешеләр был ябай ғына ҡағиҙәне үтәргә теләмәй", - ти техник фәндәр докторы Александр Тарасов.

■ Австралия ғалимдары раҫлауынса, ҡояштан һаҡлаусы кремдар яман шеш һәм тире яныуҙан ғына түгел, ә тирене ҡартайыуҙан да һаҡлай. Дүрт йыл барған тикшеренеүҙәрҙә 900 кеше ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө көн һайын ҡояшта ҡыҙынған һәм ҡояштан һаҡлаусы крем менән ҡулланған. Һуңынан заманса ҡоролмалар ярҙамында табиптар тиренең торошон тикшергән. Анализ күрһәтеүенсә, даими рәүештә махсус крем ҡулланыусыларҙа тире ҡартайыуы билдәләре 24 процентҡа түбәнерәк булған. Доктор Грин фекеренсә, ҡояштан һаҡлаусы кремдың медицина тәғәйенләнешенән тыш, косметик файҙаһы ла бар.

■ Дуйсбург-Эссен университеты хеҙмәткәрҙәре һөләктәрҙең тағы бер файҙалы яғын асыҡлаған. Мигрень - баштың ярты яғының ауыртыуы менән билдәләнгән нервы ауырыуы донъяла иң киң таралған сирҙәрҙең береһе. Гирудотерапевттар раҫлауынса, был проблеманы хәл итеүҙә һөләктәр ярҙам итә аласаҡ. Үткән быуаттың 80-се йылдарында ҡан ойошоуҙы һәм гангренаны туҡтатыу өсөн һөләктәр ҡулланыла башлай. Табиптар әйтеүенсә, тубыҡ быуыны артриты ваҡытында ауыртыуҙы ике айға баҫыу өсөн бер нисә тапҡыр һөләк сеансы алыу ҙа етә. Хәҙер белгестәр нервы ауырыуҙарын һөләктәр ярҙамында дауаларға тырыша. Барыһы ла һөләктәрҙең төкөрөгөндәге матдәләргә бәйле, улар ауыртыуҙан һәм шешеүҙән ҡотҡара.

ҠЫҘ-ҠЫРҠЫН ҠОЛАҒЫНА

# ЯЛТЫРАУЫҠТАР АРТЫНДА...
## ҡалтырауыҡтар ята

**Өлкән синыфта уҡып йөрөгән әҙәпле генә бер таныш ҡыҙҙың, шау-шыулап, геү килеп күңел асҡан компания мөхитендә төшкән фотоһын күргәс, ошо юлдарҙы яҙырға булдым. Бындағы нәсихәт ул ҡыҙға төбәлһә лә, милләтемдең бар ҡыҙҙарына ла ҡағыла, тип уйлайым.**

Йәшлегеңде боҙма. Зирәк бул, аҡыллы бул. Хәмер һуҙған кешеләр бөгөн яҡын күренһәләр ҙә, һиңә бер ҡасан да дуҫ булмаясаҡтар. Өлкән булырға тырышып, теләһә кемдәрҙең насар ҡылыҡтарын ҡабатлауҙан ғибәрәт ахмаҡлыҡҡа ҡарағанда, бындай йәмғиәттә "аҡ ҡарға" булып ҡалыу күпкә яҡшыраҡ. Сабыр бул. Бөгөн үҙҙәрен өлкән, текә итеп күрһәтергә тырышыусыларҙың кемдәрелер биш-алты йылдан һуң, һәленеп төшәсәк. Уларҙың ирекле мөхәббәттәре шыр аҙғынлыҡ менән тамамланасаҡ. Ә бәхетле ғаилә, әҙәпле балалар хаҡындағы хыялдары селпәрәмә киләсәк. Сөнки баштан уҡ хаталы юл һайлап, тәғәйенләнгән урынға, маҡсатҡа етеп булмай. Бәхет тә өмөт итеп булмай.

Кеше тәбиғәте шулай ҡоролған: ир-егеттәр араһында ниндәй генә упҡында булмаһын, унан сығырға көс табыусылар етерлек. Ваҡыт үтеү менән һин дә мин йәшәп китәләр. Тиҫтәләрсә миҫал килтерә алам: эскелеккә, вәхшилеккә юлыҡҡан көслө заттар, ваҡыт үтеү менән хаталарын аңлап, дөрөҫ юл һайлайҙар. Гүзәл заттар менән хәл башҡасараҡ. Бер тапҡыр бысраҡ юлға баҫтыңмы, ул юлдан бысранмайынса сығып булмай. Ҡыҙ-ҡырҡын артынан күҙҙәр күберәк күҙәтә, ғәйбәт тигән нәмә лә улар хаҡында йышыраҡ тарала. Күп осраҡта уларға үткәндәре иркенләп, матурлап йәшәргә мөмкинлек бирмәй. Хаталанып, рухи таҙарыныу юлын эҙләй башлағандарҙы ла ғүмер баҡый быхдан ғазабы ыҙалата. Үткәндәрен хәтерләтеп тороусы кешеләр, сәбәптәр сығып ҡына тора.

Тормош һынауҙарының береһе шулдыр: хәҡиҡәткә илткән юлдар төрлө кәртәләр, битлектәр менән ҡапланған. Ә аҙғынлыҡҡа, рухи тарҡалыуға, түбәнселеккә йүнәлгән юлдар сатына тәмләткестәр, ләззәттәр теҙеп ҡуйылған. Кеше тигән йән эйәһе бар ғүмерен оло һайлауҙа үткәрә. Ваҡытлыса рәхәтлеккә алданып, мәңгелек тормошон юҡҡа сығарамы, әллә түҙемлек күрһәтеп, яңы бейеклектәргә күтәреләме - барыһы ла үҙенең ҡулында. Күпме кеше үткәндәрҙе кире ҡайтарыу хаҡында һыҡтап илай, бөгөн булһа, ҡылған хаталарымды яһамаҫ инем, тип сәстәрен йолҡа. Ләкин үткәндәр ҡайтмай, ихлас тәүбә гонаһтарҙы йыуһа ла, яра урындарын бөтөштәрә алмай һәм бәләкәй генә тетрәнеүҙәр ҙә ул яраларҙың ҡабаттан асылыуына сәбәпсе була. Терһәк тешләрлек булырһың да, ләкин...

Иблис ҡолдары бөгөн бар яҡлап йәмғиәт нормаларын, кешеләр араһындағы матур мөнәсәбәттәрҙе, әхлаҡ һәм әҙәп ҡағиҙәләрен тарҡатыу эше алып бара. Бар Европаның аҙғынлыҡ һәм хурлыҡ һаҙлығында батыуын күрәһеңдер. Бирелгән ниғмәттәр ҙә, именлек тә Рим балаларын ҡотҡара алмай. Уларҙың бөгөнгө ялтырауыҡтары артында Көнбайыш цивилизацияһын юҡҡа сығарасаҡ оло ҡалтырауыҡ ята. Беҙгә лә ошо "киммәттәр"ҙе тараталар түгелме? Һәм иң осло уҡтар милләт әсәләре, тәрбиәселәре һәм ғаилә усағы һаҡсылары булған гүзәл заттарға, шул иҫәптән һиңә йүнәлтелә. Сөнки тәрбиәгә һәм бәхетле ғаилә усағына зыян килтергәндә, ҡалғанын ваҡыт үҙе емерә. Алдынғы технологиялар ҙа, ҡеүәтле ҡорал да, Швейцария банкындағы миллиардтар ҙа уны ҡотҡара алмай.

Яҡшылыҡҡа өмөтеңдө юғалтма, изгелеккә инан, шайтан ҡотҡоһона алданма. Үҫмер саҡтағы уйҙар һинең шәхес булып үҫешкәнеңде аңлатмай әле. Ә инде үҫмерлек максимализмына алданһаң, ғүмерлеккә бала-саға, үҫмер зиһене менән генә тороп ҡалыу ҡурҡынысы бар. Яҡшы миҫалдар эҙлә, үҙеңде рухи, интеллектуаль, физик яҡтан камиллаштыр. Рухи бушлыҡты дискотека, күңел асыу, йыр тыңлауҙан килгән алдаҡсы хистәр менән тултырма. Насар кешеләрҙе, яман компанияларҙы иптәш итеп алма. Аҙғынлыҡ таратыусы "йондоҙҙар"ҙа һинең көнкүрешеңә бер нисек тә йоғонто яһамаһын. Кем икәнеңде, ни өсөн был донъяға килгәнеңде һәм Кем ихтыярында йәшәгәнде аңлағандан һуң ғына һин Үҙеңде, үҙ юлыңды табасаҡһың.

Бәхет ҡаҙанғандар араһында булырға насип итһен һиңә!

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

ҺҮҘҘЕ ДАУАМ ИТЕП...

# ИМАНЫНА ҠАРАП...
## баһаһы

**Һуңғы арала башҡорт ҡыҙҙары гүзәллек бәйгеләрендә уңышлы ғына сығыш яһай. Шулай уҡ һуңғы ике-өс йылда Рәсәйҙә лә, Европа, Азия ҡитғаларында ла һылыулыҡта башҡорт, татар, ҡаҙаҡ ҡыҙҙарына етеүсе юҡ. Һылыуҙарыбыҙ хатта Көнсығыш матурлығына ксенофобик күҙлектән ҡараған баһалама ағзаларын да хайран ҡалдыра. Ҡыуанырғамы? Ошо урында һигеҙ тиҫтә йыл элек булған шундай бер матурлыҡ бәйгеһе һәм унда һөйләнгән телмәр хаҡында хәтергә төшөрөп китәйек.**

1932 йылда Кемаль Ататөрк ҡушыуы буйынса Төркиәлә матурлыҡ конкурсы үтә. Унда еңгән төрөк һылыуы Кериман Халис шул уҡ йылда Бельгияла үткән матурлыҡ конкурсында "Һылыулыҡ королеваһы" исемен яулай. Әлеге мәлдә был конкурс "Донъя мисы" тип атап йөрөтөлә. Конкурс шарттары буйынса, ҡатнашыусылар үҙ тороштары, кейемдәре, ҡараштары һәм йылмайыуҙары менән баһалама ағзаларының иғтибарын йәлеп итергә тейеш була. Шул иҫәптән, ярым шәрә килеш йөрөп, тән матурлығын күрһәтеү ҙә төп шарт булып тора. Ирҙәренән һәм яҡын туғандарынан башҡаларға йөҙҙәрен дә күрһәтмәгән, паклыҡ, баҫалҡылыҡ беренсе урында торған мосолман ҡатын-ҡыҙының ят ирҙәр алдында сисенеүе европалылар өсөн оло еңеү булараҡ ҡабул ителә. Еңеүсене иглан итер алдынан сәхнәгә баһалама рәйесе сыға һәм шундай телмәр тота:

- Хөрмәтле баһалама ағзалары! Бөгөн беҙ Европаның, христиан диненең еңеүен байрам итәбеҙ. 1400 йыл буйы хаҡимлыҡ иткән исламға сик ҡуйылды. Уны Европа насранизҙары юҡ итте. Әлбиттә, бында беҙ Америка һәм Рәсәй ролен дә инҡар итмәйбеҙ. Ни булһа ла, был дөйөм еңеүебеҙ. Мосолмандар вәкиле, төрөк һылыуы Кериман беҙҙең алдыбыҙҙа һыу инеү кейемендә килеп баҫты. Беҙ уны үҙебеҙҙең еңеүебеҙҙең тажы итеп ҡабул итәбеҙ, уны "Һылыулыҡ королеваһы" итеп һайлайбыҙ. Унан матурыраҡ ҡыҙҙар булыуы мөһим түгел. Быйыл беҙ матурлыҡ батшабикәһен һайламайбыҙ, быйыл беҙ Европаның, христиан диненең еңеүен билдәләйбеҙ. Француздарға һарай бейеүҙәрен тыйған Сөләймән солтандың вариҫы беҙҙең алдыбыҙҙа һыу инеү кейемендә һәм күкрәксәлә ярым шәрә килеш баҫып тора. Ул беҙгә оҡшарға тырыша. Һәм шуға күрә лә ул беҙгә оҡшай. Мосолмандарҙың киләсәге шундай буласаҡ, тигән өмөт менән беҙ төрөк һылыуын еңеүсе итеп һайлаясаҡбыҙ. Ләкин бокалдарҙы Европа еңеүе өсөн күтәрәбеҙ, - ти баһалама рәйесе.




**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо миҫалдан һигеҙ тиҫтә йыл осоронда европалыларҙың үҙ маҡсаттарына өлөшләтә булһа ла өлгәшеүен күрәбеҙ: улар бәғзе бер мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының әхлағын үҙҙәренеке кимәленә төшөрә яҙҙы. Ислам дине ҡыҙ-ҡатындың матурлығын оҙон аяҡтарға һәм күкрәктәргә ҡарап түгел, ә иманына ҡарап баһалай. Ә иман Ер йөҙөндәге иң олуғ баһа һәм ҡиммәт икәнен иҫенән сығармаһын ине һылыуҙарыбыҙ.**

**Ильяс ХЫЗЫРОВ.**

*✓ Шәғбан айының 14-енән 15-енә ҡарай кистә япраҡтарына Ерҙә йәшәгәндәрҙән һәр кемдең исемдәре яҙылған тормош ағасы тетрәнеп, япраҡтары ҡойола. Исемдәре ошо япраҡтарҙа булғандар йыл дауамында фани донъянан күсеп китәсәк.*



*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

**Һижри йыл (1434 йыл) буйынса 10 июндән Шәғбан айы башланды. Шәғбән - ислам динендәге өс изге айҙың береһе. Үҙенең бер хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙ: "Шәғбан айының 15-се кисен ғибәҙәт менән үткәрегеҙ, көндөҙ ураҙа тотоғоҙ. Был кистә Аллаһы Тәғәлә ҡояш сыҡҡансы донъяға рәхмәт күҙе менән ҡарар һәм: "Тәүбә итеп, гонаһтарын ғәфү итеүемде һораусылар юҡмы? Булһа, ризыҡ бирәм. Ҡайғы-хәсрәттәргә тарып, сәләмәтлектәре юғалып, яфа сигеп ятҡандар юҡмы? Булһа, тәндәренә тыныслыҡ, ауырыуҙарына шифа бирәм. Ниндәй генә теләктәре бар - һораһындар: бөтә теләктәрен үтәйем", - тиер. Был мөрәжәғәт таңға тиклем дауам итер", - тигән.**

# ИХЛАСТАР...

## бәхеткә өлгәшә

Бәраәт һүҙе ғәрәпсәнән "ҡатнашмау", "тулыһынса айырылыу", "таҙарыныу" тип тәржемә ителә. Гонаһлылар, Раббыһына ҡаршы сығыусылар был төндә тулыһынса Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәтенән мәхрүм ителә, ә ихлас мөъминдәр бәхеткә өлгәшә, уңышһыҙлыҡтарҙан һәм Раббыһынан ярҙамһыҙ тороп ҡалыуҙан ҡотола.

Бер ғалим: "Ерҙә кешеләрҙең ике байрамы булған кеүек үк, күктә лә фәрештәләрҙең ике байрамы бар. Фәрештәләр байрамы - Бәраәт һәм Ҡәҙер төндәре, ә мосолмандарҙың байрамдары - Ураҙа һәм Ҡорбан ғәйеттәре", - тип әйткән. Икенсе ғалим: "Аллаһы Тәғәләнең Бәраәт кисенең ҡасан булыуын әйтеп, Ҡәҙер төнөн йәшереүенең хикмәте шунда: Ҡәҙер төнө - ул шәфәғәтлек, рәхимлелек, гонаһтар кисерелеү һәм тамуҡ уттарынан һаҡланыу төнө. Кеше уға артыҡ өмөтләнеп, һуңынан тынысланып, изге эштәрен туҡтатып, ғәфләткә бирелмәһен өсөн Аллаһы Тәғәлә уны йәшергән. Бәраәт кисе күрһәтелеүенең сәбәптәре түбәнгеләр: был хөкөм һәм тәҡдир, асыу һәм ризалыҡ, ҡабул итеү һәм кире ҡағыу, изге ғәмәлдәргә өлгәшеп, уларҙы һаҡлау, бәхет һәм бәхетһеҙлек, шәфәғәт һәм изгелек төнө. Бәғзеләр был төндә бәхет ҡаҙана, икенселәр Аллаһ рәхмәтенән мәрхүм ҡала, берәүҙәр ҙур әжер ала, икенселәрҙең Аллаһы Тәғәлә алдындағы дәрәжәһе кәметелә һәм улар бәхетһеҙҙәр сафына эләгә, берәүҙәр уңыш ҡаҙана, икенселәр бер ниһеҙ тороп ҡала... Был төндә ихлас күңелдән Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, Унан изге ғәмәлдәрегеҙҙе ҡабул ҡылып, гонаһтарығыҙҙы ғәфү итеүен һорағыҙ", - тип әйткән.

Шәғбан айының 14-енән 15-енә ҡарай кистә япраҡтарына Ерҙә йәшәгәндәрҙән һәр кемдең исем-шәрифтәре яҙылған тормош ағасы тетрәнеп, япраҡтары ҡойола. Исемдәре ошо япраҡтарҙа булғандар йыл дауамында фани донъянан күсеп китәсәк. Ә йәшәп ҡалғандарҙың яҙмышы фәрештәләр ихтыярына тапшырыласаҡ. Бөтә булмыштарҙың, бөтә мәхлүктәрҙең ашар ризығы, бәндәләрҙең байлыҡ йәки ярлылыҡ хәлдәре, тормоштағы төрлө дәрәжәләре, был донъяға тыуасаҡ һәм үләсәк бәндәләр - бөтәһе лә был кистә билдәләнеп ҡуйыла, ти.

Иң мөһиме, был кистә үтелгән тормошҡа байҡау яһау, ҡылған эштәрҙе, уйҙарҙы барлау, тәүбәгә килеү, хаталарға ҡабаттан ҡайтмаҫҡа һүҙ биреү һәм ошо вәғәҙәлә беҙҙе нығытыуын һорап, Раббыбыҙға ялбарыу, рәнйеткән кешеләребеҙҙән ғәфү үтенеү кәрәк. Бәраәт кисен намаҙҙар, доғалар ҡылып, Ҡөрьән уҡып, ололарға, ата-әсәләргә хөрмәт күрһәтеп, уларҙың фәтихаһын алып, ғибәҙәттә үткәреү хуплана. Шулай уҡ Аллаһы Тәғәләнән мәрхүм булғандарҙың гонаһтарын кисереүен һорауҙы ла оноторға ярамай. Ҡояш байыр алдынан 40 тапҡыр "Собхәналлаһи үәл-хәмдү лилләһи үә лә иләһә илләллаһү үәллаһү әкбәр, лә хәүлә үә лә ҡүәттә илләбилләһил-ғәлиййил-ғазыйм" доғаһын уҡып, һуңынан 100 тапҡыр салауат (мәҫәлән, "Алллаһүммә салли ғәлә Мөхәммәҙин үә ғәлә әәли Мөхәммәҙин үә сәлләм") әйтеү фарыз. Аҡшам намаҙынан һуң 6 рәҡәғәт нәфел намаҙы ҡылыныуы хаҡында риүәйәттәр ҙә килеп еткән. Намаҙҙан һуң өс тапҡыр, тәүгеһендә ғүмер оҙайтылыуын, икенсеһендә бәләләрҙән йыраҡлашыуҙы, өсөнсөһөндә ниғмәттәр арттырылыуын ниәт итеп, "Йәсин" сүрәһен уҡыу тәҡдим ителә. Уҡығандан һуң Бәйғәмбәребеҙ сөннәтенән йә үҙебеҙ теләгән доғаны әйтә алабыҙ. Бәраәт төнөндә тәсбих намаҙына ла ваҡыт ҡалдырылғанда, мөьмин отор ғына. Ләкин бер мөһим нәмәне онотorға ярамай: мөшриктәргә, туғандары менән бәйләнештәрҙе өҙгәндәргә, ата-әсәһен йәберләгәндәргә, тәкәбберҙәргә, алкоголь ҡулланғандарға, зина ҡылыусыларға, фетнә сығарыусыларға, исламдан ситләшкәндәргә, ғәйбәтселәргә Аллаһы Тәғәлә йөҙөн бормаясаҡ. Уларҙың доғалары, изге эштәре ҡабул булмаясаҡ.

Ғүмер ҡасан да булһа тамамланасаҡ. Һәр инсан ҡылған эштәре өсөн Раббыһы алдында яуап тотасаҡ. Шуға күрә, бер мәлгә лә Аллаһы Тәғәлә хаҡында онотмайынса, иң башта намаҙға, һуңынан ураҙаға, зәкәткә, хажға, барлыҡ изге ғәмәлдәргә яуаплы ҡарарға бурыслы мосолман. Изге кисәләр, ғәйет байрамдары, йомалар мөъминдәргә ҙур мөмкинлектәр биргән Аллаһы Тәғәләнең оло бүләге ул. Быйыл Бәраәт кисе 23-сө июндән 24-се июнгә ҡарай төндә көтөлә.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Шәкәр - кеше уйлап тапҡан ағыуҙарҙың иң яманы

Мин туҡтап ҡалдым һәм әңгәмәсемдең күҙҙәренә ҡараным. Юра быны өнһөҙ һорау тип ҡабул итте һәм артабан һөйләп алып китте: "Шәкәр - кешелек уйлап тапҡан иң ҙур яуызлыҡ. Ғөмүмән, кеше тарафынан яһалма рәүештә барлыҡҡа килтерелгән бөтөн нәмә кеше мәнфәғәте өсөн эшләмәй. Ҡағыҙ һәм дары, быяла һәм пластмасса, ҡорал һәм ядро ҡоралы, самолеттар һәм автомобилдәр - һеҙ, философтар, мәҙәниәт тип атаған бөтөн нәмә кешене ярлыландыра һәм кешелекте һәләкәт сигенә этәрә. Кеше тарафынан яһалма рәүештә булдырылған бөтөн нәмә - иғтибар һәм тәрбиә, ә кеше аңының нимәгәлер йүнәлтелеүе энергия талап итә. Һәр индивид гендар аша һалынған аныҡ нормаланған энергетик ҡеүәткә эйә. Тимәк, ни тиклем әйберҙәр күберәк, шул тиклем энергия күберәк исрафлана. Әммә был ҡеүәтте тултырыу өсөн өҫтәмә сығанаҡтар юҡ. Шул саҡта өлкән кеше, үҙе лә аңламаҫтан, уны мөхәббәт энергияһы иҫәбенә компенсациялай башлай. Ә балала мөхәббәт энергияһының ҙур запасы бар. Аңлау табыу өсөн ул ата-әсәһенә бик күп һорау бирә, ҡосаҡлашырға, үбешергә ынтыла, ата-әсәһенә йорт эштәрендә ярҙамлашырға тырыша. Ләкин бала һәр ерҙә лә битарафлыҡҡа, ярһыулыҡа, тупаҫлыҡҡа, ҡайһы берҙә асыҡтан-асыҡ күрә алмауҫанлыҡҡа һәм оятһыҙлыҡҡа осрай.

Әммә ата-әсәнең һалҡын интеллекты бындай тәртиптең үҙҙәренә ҡаршы һәләкәт булып әйләнәсәген иҫкәртә. Шул саҡта улар мөхәббәт урынына балаға уның суррогатын - кәнфит бирә. Кәнфит һурыу балаға ҡәнәғәтлек килтерә һәм ул уның мөхәббәткә булған ынтылышын алмаштыра. Шулай итеп, мөхәббәттән мәхрүм ата-әсә балаға кәнфит биреп алдаштыра. Бында кәнфит урынында составында шәкәр булған бөтөн аҙыҡ-түлекте күҙалларға кәрәк. Мейенең татлы шәкәрле аҙыҡ-түлекте мөхәббәт сағылышы тип ҡабул иткән өлөшө уны алмаштырыусы продуктҡа күнегә. Әммә кешенең күңел түрендә булған ысын мөхәббәткә ихтыяжы бер ваҡытта ла һүнмәй. Үҫмер ваҡытында ул мөхәббәт етешмәүен сигарет һәм һыра ярҙамында тултырырға тырыша, һуңынан шарап һәм араҡыға күсә. Өлгөргәнлек йылдарында егет мөхәббәтте енси күнекмәләрҙә эҙләй, әммә бында уңышһыҙлыҡ кисерә. Шул саҡта ул тормошҡа ашмаған мөхәббәтен баҫыуҙың һуңғы сараһына - наркотиктарға мөрәжәғәт итә. Йәштәрҙең ҡайһы бер өлөшө тағы ла радикаль юл һайлай - үҙенә ҡул һала. Быны нигеҙендә шәкәр ятҡан, тәү ҡарашҡа, бер ғәйепһеҙ кәнфит нимәгә килтерә. Ул йоғошло ауырыуҙар, ядро ҡоралы, тоҙ, рафинадланған аҙыҡ-түлектең барыһын бергә алғанға ҡарағанда ла хәүефлерәк".

Мин Юраны тыңланым, әммә бер ни тип тә яуап ҡайтарманым. Балалыҡ йылдарым иҫкә төштө - ата-әсәләр бер ваҡытта ла беҙгә шәрбәт йәки шәкәрҙе иркен тотонорға ҡушмай торғайны. Ашағанда һәр беребеҙгә йә берәр кәнфит, йә бер балғалаҡ ярым шәкәр бирә торғайнылар - һәм вәссәләм. Башҡа ваҡытта шәрбәтле аҙыҡтар бикле торҙо. Ул саҡта беҙ, балалар, мөхәббәттән мәхрүмбеҙ, тип уйлай инек. Ҡайһы бер тиңдәштәребеҙҙең һәр саҡ кеҫәләрендә ҙур киҫәкле шәкәр, ул ваҡыттағы иң тәмле ризыҡ, йөрөтөүен һәм һәр саҡ уны имеүҙәрен күрә торғайныҡ. Бөгөн уларҙың күбеһе беҙҙең арала юҡ. Һәм, ниһайәт, күп йылдар үткәс, миңә ата-әсәйемдең йәшерен аҡылы килеп етте - улар шулай итеп балаларының ғүмерен һаҡлаған икән.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы. (Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

171. Бер нисә айға бер тапҡыр булһа ла букинистик китаптар араһында ҡаҙынып, характерығыҙҙы нығытырға ярҙам итерлек байлыҡ эҙләгеҙ. Уларҙа һеҙ нисек итеп кеше алдында сығыш яһарға, нисек итеп матур сифаттар тәрбиәләргә, нисек итеп ваҡытыңды файҙалы бүлергә, нисек итеп сәләмәтлегеңде нығытырға ҡиммәтле кәңәштәр табырһығыҙ. Бындай китаптар арзан була. Ошо боронғо текстарҙың күбеһе бик көслө һәм һәр йәш кеше үҙендә тәртип һәм сәләмәт тормош ғәҙәттәре тәрбиәләргә тейешле булған замандарҙан килеп етеүе менән әһәмиәтле.

172. Клод М. Бристолдең "Волшебство веры" тип аталған китабын уҡығыҙ. Ул һеҙгә мейегеҙҙең серле мөйөштәрендә һаҡланып, әлегәсә файҙаланылмаған ҡеүәтле көстәрҙе һәм энергетик ресурстарҙы азат итеп, уларҙы эшкә ҡушырға мөмкинлек бирәсәк.

173. Һеҙҙе айыҡ аҡыллы, ҡайнар йөрәкле, ныҡлы характерлы кеше тип белһендәр. Шул саҡта был донъяла булыуығыҙҙы кешеләр оҙаҡ хәтерендә һаҡлар.

174. Башҡалар өсөн нимәлер эшләү - диндең иң юғары формаһы. Һәр аҙна 168 сәғәтегеҙҙең бер нисәһен генә башҡаларға хеҙмәт итеүгә бүлегеҙ. Күптәр өсөн шундай фиҙаҡәрлек тормош рәүеше булып китә. Ҡарттар йәки балалар йорттарына иғтибар йүнәлтегеҙ. Кемделер уҡырға өйрәтегеҙ йәки үҙегеҙҙә ниндәй өлкәлә ҙур байлыҡ тупланған, шуның буйынса халыҡ алдында лекция уҡығыҙ. Үҙегеҙҙән һуң лайыҡлы мираҫ ҡалдырыу мөмкинлеге биргән эшмәкәрлек уйлап табығыҙ.

175. Өйөгөҙҙө сағыу гөлдәр менән тултырығыҙ. Был һеҙ эшләй алған биҙәүҙең иң яҡшы төрө. Матур музыка, шат көлөү тауыштары, ҡыуаныс өйөгөҙҙө оазисҡа әйләндерһен.

176. Күршеләрегеҙ менән танышығыҙ һәм уларҙы яратырға тырышығыҙ. Улар тормошоғоҙҙо тағы ла матурыраҡ итәсәк, үҙегеҙ ҙә көтмәгәндә һеҙҙең өсөн файҙалы ярҙамсы буласаҡ.

177. Мантраларҙың көсөн һәм ыңғай, ҡеүәтле һүҙҙәрҙе ҡабатлауҙың файҙаһын танығыҙ. Һиндостан йогтары был техниканы дүрт мең йылдан ашыу ҡуллана һәм тыныс, һөҙөмтәле, диҡҡәтле тормошҡа эйәләр. Үҙегеҙҙең шәхси мантрағыҙҙы уйлап табығыҙ һәм уны көн һайын характерығыҙҙы нығытыу, рухығыҙҙы сыныҡтырыу өсөн ҡабатлағыҙ.

178. Әгәр тын алышығыҙ көслө һәм тыныс икән, аңығыҙ ҙа шундай.

179. **Ваҡыты-ваҡыты менән түбәндәге алымды файҙаланығыҙ. Уңайлы итеп ултырығыҙ һәм, бер генә көн ғүмерегеҙ ҡалған икән, тип күҙаллағыҙ. Кемгә шылтыратыр, нимә һөйләр һәм нимә эшләр инегеҙ? Был һорауҙар һеҙгә тәү сиратта тамамларға кәрәкле эштәрегеҙҙең мөһимлеген асыҡларға ярҙам итәсәк.**

180. Көслө характерҙың түбәндәге сифаттарын иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ:

- Фекерегеҙҙең аныҡлығы һәм асыҡлығы, уны дөрөҫ итеп әйтеп биреү.
- Шымартылған һәм йомшаҡ ғәҙәттәр.
- Энергия һәм үҙегеҙгә анализ яһау ғәҙәте.
- Үҙегеҙҙе үҫтереүҙең юғары кимәле.
- Маҡсатҡа ынтылғанда һәм хыялдарҙы тормошҡа ашырғанда ныҡышмалылыҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 17 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
16.10 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Пандора". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (+16)
00.00 "Познер" (16+)
01.00 Ночные новости
01.25, 03.05 "План на игру". Комедия (12+)
03.00 Новости
03.30 "Фаина Раневская. "Красота - страшная сила" (12+)
04.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые читатели! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 104-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Поцелуйте невесту!". Сериал. Мелодрама
17.00 "Вести"
17.00 "Вести - Башкортостан"
17.30 "Каменская-4". "Личное дело". Детективный сериал (12+)
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Право на правду". Детективный сериал (12+)
23.40 "Драма на Памире. Приказано покорить" (12+)
00.40 "Гибель "Воздушного Титаника". Стратонавты" (12+)
01.35 "Вести+"
02.00 "Почему бы я солгал?" (16+)
04.00 "Большая любовь-5" (16+)

### "ҠУРАЙ"

